ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

КискеӨфө

4–10 сентябрь (һарысай)

2026

№35 (1230)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2027 йылдың беренсе яртыһы өсөн 1 сентябрҙән 1230 һум 42 тингә яҙыла башларға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәткеле менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡош-ҡортҡа паспорт бирәләр!



4-5

Мин яҙғанды, әкиәт, тимә…

әкиәт төбөндә лә хәҡиҡәт бар



7

"Гүзәл-Дэнс" бейеүҙәрен…



8-9

Был музейҙа…

Ленинды терелтеп ебәрҙеләр



11

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

АУЫРЛЫҠТЫ…

әҙер булып ҡаршыла!

Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?

Илнур ШӘҒӘЛИЕВ, төҙөүсе, Күгәрсен районы: Бөгөн көн дә яңы сығымдар, үҙгәреүҙәр, көтөлмәгән хәлдәр менән осрашабыҙ. Әммә күңелде төшөрөп ултыра торған ваҡыт түгел. Тарих күрһәтеүенсә, халҡыбыҙ иң ауыр миҙгелде лә берҙәмлек менән, бер-береһенә ярҙам итеп үткәргән. Бергә булһаҡ, тауҙы ла күтәрергә була, тигән әйтем дә шунан килеп сыҡҡандыр халҡыбыҙҙа.

Ҡыйынлыҡтар ваҡытлыса. Иң мөһиме - кешелеклегебеҙҙе юғалтмайыҡ.

Тағы ла шуны әйткем килә: иртәгәһе көнгә ышаныслы ҡарар өсөн дөрөҫ мәғлүмәтле булыу кәрәк. Быныҡ өсөн тик тикшерелгән сайттарҙағы материалдарҙы, дәүләт гәзит-журналдарын ғына уҡырға кәңәш итер инем. Шулай уҡ алдан хәбәр итеү системаларына ҡушылығыҙ. Башҡортостанда "112" системаһы әүҙем эшләй, район хакимиәттәренең сайттары һәм социаль селтәрҙәге рәсми төркөмдәрҙе ҡарап барығыҙ. Башгидромет сайтында көн торошон алдан күреп белергә мөмкин.

Тәбиғәт ҡаҙаларына әҙер булыу ҙа кешене төшөнкөлөктән һаҡлай. Мәҫәлән, өйҙә һәр саҡ документтарығыҙ, 1-3 көнгә етерлек ризыҡ, һыу, аптечка, фонарь ҡул аҫтында булһын.

Иң мөһиме - эмоциональ тыныслыҡ. Ауыр осорҙарҙа күңелде төшөрөп ҡуймау өсөн көн һайын тын алыу гимнастикаһы, китап уҡыу, тыныс музыка тыңлау ҙа кәрәк. Үҙебеҙҙең рухыбыҙҙы ошолайтып һаҡлап була. Ғаилә ағзаларығыҙ менән һөйләшеп ҡуйығыҙ: ниндәй ҙә булһа ғәҙәттән тыш хәл осрағында ҡайҙа йыйылырға, кем менән бәйләнеш тоторға.

Һәм тағы бер мөһим әйбер: ай һайын эш хаҡыңдың 5-10 процентын йыйып барыу көтөлмәгән хәлдәрҙә (ремонт, дауаланыу) күңел тыныслығы бирер.

Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.

ҺӨЙӨНСӨ!

КҮПТӘН КӨТӘ ИНЕК!



Күптәр өсөн өҙөлөп көткән хәбәр: 1 сентябрҙә Өфөнөң Пугачев урамы буйлап дүрт юл һыҙатынан да хәрәкәт асылды.

- Республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, билдәләнгән ваҡыттан алда Пугачев урамында дүрт һыҙат буйлап хәрәкәт асылды. Объект Республика көнөндә тулыһынса файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Әле Дуҫлыҡ монументынан алып Рыленко урамына тиклем дүрт һыҙат буйлап та тотҡарлыҡһыҙ үтергә мөмкин, - тине урамды асыу ваҡытында Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Рөстәм Ғәзизов.

Урам юлының яңыртылған участкаһы 2,5 км тәшкил итә. Эштәрҙе тулыһынса тамамлауға бүленгән осорҙа, Республика көнөнә тиклем, төҙөүселәр алдында "дублер" юлды төҙөп бөтөү һәм эргә-тирәләге биләмәне төҙөкләндереү бурысы тора.

Өфө мэры вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов объекттың күптән көтөлгән инфраструктура проекты булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

- Бындай ҙур проекттарҙы тормошҡа ашырмай тороп, миллионлы ҡаланы үҫтереү, әлбиттә, мөмкин түгел. Пугачев урамы Өфөнөң транспорт ағымын бушатыу, уңайлы шарттар булдырыу һәм Кузнецов затоны биҫтәһен үҫтереү мөмкинлеген бирә. Бөгөндән халыҡ ошо юлдан файҙалана башлаясаҡ һәм быныҡ өсөн республикабыҙ етәкселегенә рәхмәтлебеҙ, - тип белдерҙе ҡала етәксеһе.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

ЮЛЫ ЛА, ӘМӘЛЕ ЛӘ БАР…

тик теләк кәрәк!

Гәзит уҡыу, республикабыҙ баҫмалары хаҡында һүҙ сыҡһа, һәр ваҡыт күп йылдар өйөмә яҙҙырып алдырған һәм минең генә түгел, ғаиләмдең дә тоғро дуҫына әүерелгән "Киске Өфө" аҙналығы күҙ алдыма килә.

Ниндәйҙер сәбәптәр менән үҙҙәре гәзит алдырмаған туған-тыумаса һәм күршеләрем дә хатта беҙгә йомош-юл менән ингән һайын, эш өҫтәлемдә ятҡан ошо гәзит төпләмәһенән берәй һанын һорап алып сығып китә, тик мин уларға уҡып бөткәс тә гәзитте кире килтереүҙәрен талап итәм, сөнки улар миңә эшем буйынса ғына түгел, ғөмүмән, рухи донъябыҙ мәсьәләләре, милләтебеҙ тарихы, туған тел уҡытыу, арҙаҡлыларыбыҙ хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр сығанағы булараҡ та бик ҡәҙерле. Мәҫәлән, ошо юҫыҡта мин, тарих уҡытыусыһы булараҡ, гәзитебеҙҙең "Тарих ярсыҡтары", "Башҡорт ҡамусы", "Туған телем", "Тәрбиә мәктәбе" рубрикаларында баҫылып сыҡҡан һәр мәҡәләочеркты мәктәпкә алып барып, уҡыусыларымдан класс алдында ҡысҡыртып уҡытам, ҙаҡ йөкмәткеһен һөйләтәм. Әйткәндәй, халҡыбыҙ тарихы хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе балалар ҡыҙыҡһынып тыңлай, һорауҙар менән күмеп ташлай хатта. Уларҙы айырыуса башҡорттоң боронғо ҡорал төрҙәре, кейем-һалымы, йәшәү, туҡланыу ғәҙәттәре ҡыҙыҡһындыра, сөнки физкультура уҡытыусыһы етәкселегендә эшләп килгән уҡсылар түңәрәге бик күп балаларҙы йәлеп итте һәм улар һәр ярышҡа мотлаҡ милли кейемдә, үҙҙәренең уҡ-һаҙағы менән бара.

(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).

12+

✓ *Баһа академик билдәләрҙән айырым ҡуйыласаҡ һәм аттестатҡа йоғонто яһамаясаҡ. Былтырғы һынау йомғаҡтары буйынса өс кимәлле тәртип баһаһы һайлана: "үрнәк", "ҡабул ителгән" һәм "ҡабул ителмәгән".*

ҠЫҪҠАСА

КӘРӘКЛЕ БИЛӘМӘ

✓ **Радий Хәбиров Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында булды.** Башҡортостан Башлығы территорияның үсешеүен билдәләне, шулай уҡ паркка курсанттарға күрһәтеү өсөн совет һәм Рәсәй ҡоралының макет өлгөләрен тапшырҙы. "Патриот" паркының генераль директоры Айнур Сәлимгәрәев матди-техник базаны нығытыу тураһында һөйләне. Әлеге ваҡытта бассейнлы заманса спорт комплексы һәм рухи-ағартыу үҙәге төҙөлөшө дауам итә. Техник парк та киңәйтелә. Атап әйткәндә, тиҙҙән бында "Патриот" биләмәһе буйлап төрлө йөк ташыу өсөн электр транспорты буласаҡ, шулай уҡ хәрби техника экспозицияһы тулыландырыласаҡ. Ваҡиғаларға килгәндә, паркта күп һанлы саралар үткәреү ҡаралған. Мәҫәлән, 9 сентябргә тиклем "Патриот" паркы "Экологик именлек" милли проекты сиктәрендә ойошторолған "ГеоСаҡырыу" IV Халыҡ-ара геология чемпионатында ҡатнашыусыларҙы ҡабул итә. Шулай уҡ бында оҙаҡламай һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн "Геройҙар биләмәһе" патриотик слеты үтәсәк.

✓ **Башҡортостан Мәғариф министрлығында мәктәптәрҙәге тәртипте нисек баһалау тураһында хәбәр иттеләр.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2026/27 уҡыу йылында уҡыусыларҙың тәртибен Рәсәйҙең һәр төбәгендә ун мәктәп баһалаясаҡ, ә 2027/28 уҡыу йылынан был модель Рәсәйҙең бөтә дөйөм белем биреү ойошмаларында индереләсәк. 2026 йылдың 1 сентябренән Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин ҡушыуы буйынса Рәсәй мәктәптәрендә уҡыусыларҙың тәртибен баһалауҙың яңы системаһын һынау башлана. Республиканың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин әйтеүенсә, эксперимент 2-8-се кластарҙы үҙ эсенә аласаҡ. Башҡортостанда пилотта ҡатнашыу өсөн 10 мәктәп билдәләнгән. Баһа академик билдәләрҙән айырым ҡуйыласаҡ һәм аттестатҡа йәки дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына инеүгә йоғонто яһамаясаҡ. Былтырғы һынау йомғаҡтары буйынса өс кимәлле тәртип баһаһы һайлана: "үрнәк", "ҡабул ителгән" һәм "ҡабул ителмәгән". "Яңылыҡтың төп маҡсаты - уҡыусының шәхси үҫешен һәм уның тиҫтерҙәре һәм өлкәндәр менән ихтирамлы үҙ-ара эш итеүен дәртләндереү", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды министр.

✓ **Өфө халҡы һәм предприятиелары үткән бер аҙнала баш ҡала хакимиәте ойошторған акция сиктәрендә эшкәртеүгә 10 тоннанан ашыу төрлө ҡалдыҡтар йыйып оҙатҡан.** "Бер аҙна эсендә акцияла ҡатнашыусылар 5,2 тонна батарея һәм 3,2 тонна ҡулланылған туҡыма тапшырҙы. Был һандар ҡалдыҡтарҙың ҡиммәтле ресурс була алыуына иң яҡшы дәлил булып тора", - тип билдәләне республиканың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов. Билдәләнеүенсә, йыйылған хәүефле элементтар махсус транспорт менән Силәбегә утилләштереүгә оҙатылған. Ә текстиль Өфөләге предприятиеларҙың береһендә заводтар һәм автосервистар өсөн техник ветош итеп эшкәртелгән. Министрлыҡ хеҙмәткәрҙәре лә шәхси өлгө күрһәткән. "БумБатл" Бөтә Рәсәй акцияһы сиктәрендә улар 2076 килограмм макулатура йыйған. Ҡағыҙҙың бөтә күләме "БашЭкоВата" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенә тапшырылған. Унда ҡалдыҡтарҙы заманса йылылыҡ изоляторы - эковатаға эшкәртәләр.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

ҺӨТ ТӘ КҮП БЕҘҘӘ...

Өфөнөң "Ҡашҡаҙан" паркы майҙансығында "Һөт иле" XIV ғаилә фестивале булды. Сарала республика Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. Ул ауыл хужалығы етештереүселәренең продукцияларын ҡараны, тармаҡ ойошмалары вәкилдәре менән үҫеш мөмкинлектәре тураһында фекер алышты.

"Һөт иле" быйыл төрлө аҙыҡ-түлек сығарған 150 етештереүсене бергә тупланы. Билдәле булыуынса, беҙҙең республика тауарҙары тотош ил, шулай уҡ сит дәүләттәр ҡулланыусылары араһында киң билдәле. Фестивалдә, ғәҙәттәгесә, һәр кемде стакан тулы һөт тәҡдим итеп, сәләмләп ҡаршыланылар. Быйыл ошо маҡсатта "Росмол" төркөмөнөң Стәрлетамаҡтағы филиалы файҙалы эсемлекте 60 меңдән ашыу кешегә етерлек итеп әҙерләп килтергәйне. Майҙанда төрлө тематик локациялар - һөт йәрминкәһе, фермер баҙары, сыр, бал кибеттәре ойошторолдо, шулай уҡ "Ҡымыҙлы ауыл", "Ит бульвары" тип аталған айырым киңлектәр булдырылды.

Башҡортостан Башлығы һөт аҙыҡ-түлектәре етештереүселәрҙең экспозицияларын, фермер тауарҙары йәрминкәһен ҡараны. Мәҫәлән, "Ҡарламан шәкәре" компанияһы стенды янында республика етәксеһе ҡуйыртылған һөт етештереүҙе үҫтереү мәсьәләләре буйынса һөйләшеү ойошторҙо. Билдәле булыуынса, был аҙыҡ төрө илебеҙҙә танылған. Предприятиела уны сығарыу дауам итә, күләмде айына бер миллион банкаға ҡәҙәр арттырғандар. Өфө ҡалаһының һөт заводы ла етештереү тармағында киң билдәле. Унда 70-тән ашыу төр продукция сығарыла. Төбәктең ауыл хужалығы продукциялары баҙарында "Һөт кухняһы" проекты мөһим урын биләй. Уға ярашлы, балалар, йөклө ҡатындар, сабый имеҙгән әсәйҙәр өсөн тәбиғи аҙыҡ-түлек етештерелә. Башҡортостан Башлығы "Ҡымыҙлы ауыл" тематик биләмәһендә лә булып, етештереүселәр менән милли эсемлегебеҙҙе экспортҡа сығарыу эшен көсәйтеү хаҡында һөйләште. Ул фестивалдең урындағы аҙыҡ-түлекте киң танытыуға, төбәктең агросәнәғәт комплексын үҫтереүгә тос өлөш индереүен билдәләп, башланғысты юғары баһаланы.

ЙЫЙЫП ӨЛГӨРӨРГӘ ИНДЕ

Республика Хөкүмәте рәйесе Андрей Назаров билдәләүенсә, быйыл һауа торошо Башҡортостан игенселәрен иркәләмәй. Ямғырҙар арҡаһында ауыл хужалығы эшсәндәренә өҙөк-һурыҡ эшләргә тура килә.

"Әммә беҙҙең аграрийҙар яҡшы эшләй, хатта бик яҡшы. 2 миллион тоннанан ашыу иген йыйып алынған да инде, был 2025 йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда бер ярым тапҡырға тиерлек күберәк", - тип һыҙыҡ өҫтөнә ала ул.

Билдәләнеүенсә, ужым культуралары яҡшы уңыш биргән. Уларҙың төшөмө 963 мең тоннаға еткән, гектарынан уртаса 35 центнерҙан ашыу тәшкил иткән.

Бөгөн төбәк аграрийҙары сәсеү әйләнешенең төп культураһы булған бойҙай баҫыуҙарында эшләй. Әлеге ваҡытта майҙандарҙың 27 процент самаһы һуғылған. Гектарынан уртаса уңыш 25 центнер тәшкил итә.

"Майлы культураларға ҙур өмөттәр бағлайбыҙ, улар төбәктә рекордлы 733 мең гектар ерҙә сәселгән. Әле аграрийҙар рапс, гәрсис, етен уңышын йыя. Сиратта - көнбағыш. Юғары уңыш күҙаллана. Майлы орлоҡтарға ла хаҡтар лайыҡлы булыр тип ышанабыҙ - был хужалыҡтар иҡтисады өсөн бик мөһим фактор", - тип билдәләне Премьер-министр.

УЛАР ЛАЙЫҠ!

Республика менән идара итеү үҙәгендә эш сәфәре менән Өфөгә килгән Рәсәйҙең ауыл хужалығы министры Оксана Лут һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров агросәнәғәт комплексы системаһындағы күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн төбәктең ауыл хужалығы һәм аҙыҡ-түлек сәнәғәте хеҙмәткәрҙәренә дәүләт һәм ведомство наградалары тапшырҙы.

- Башҡортостанға даими киләм. Ул - иҡтисадтың төрлө тармаҡтары, шул иҫәптән ауыл хужалығы үҫешкән бик күп планлы төбәк. Республика йыл һайын ауыл хужалығы продукцияһын етештереү күләме буйынса үҫә. Үҙған йыл бында рекорд теркәлде - Башҡортостан 1 миллион тонна майлы һәм 3,6 миллион тонна иген культуралары йыйып алды. Малсылыҡ тармағында, һөт, ит етештереү күләме буйынса даими үҫеш күҙәтелә. Рәсәйҙең иң яҡшы аграр университеттарының береһе лә Башҡортостанда урынлашҡан. Юғары уҡыу йорто әүҙем үҫешә, барлыҡ программаларҙа ҡатнаша, бөгөн бөтә илдә билдәле. Башҡортостан продукцияһын, башҡорт брендтарын тотош Рәсәй белә. Республикала ауыл хужалығы артабан да уңышлы үҫешер тип ышанам, - тине Оксана Лут.

- Оксана Николаевна - республикабыҙҙың яҡын дуҫы. Һәм мин шәхсән һеҙгә һәм Ауыл хужалығы министрлығына даими ярҙамығыҙ өсөн ҙур рәхмәт әйтергә теләйем, - тине Радий Хәбиров. - Бөгөн беҙ агросәнәғәт комплексы хеҙмәтсәндәренә, аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеүселәргә, ауылды республикабыҙҙың, мәҙәниәтебеҙҙең һәм әхлағыбыҙҙың терәге итеп һаҡлаусыларға дәүләт наградалары тапшырабыҙ. Ауыр хеҙмәтегеҙ өсөн ихлас рәхмәтемде белдерәм. Ә республика артабан да ауылды үҫтереүгә - юлдар төҙөүгә һәм ремонтлауға, парктарҙы һәм скверҙарҙы төҙөкләндереүгә, социаль инфраструктураны нығытыуға - ресурстар йүнәлтәсәк.

ҺАҠЛАНЫУ КӘРӘК!

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров төбәктең оператив штабы ултырышын үткәрҙе. Унда министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре, шулай уҡ хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм оператив хеҙмәттәр вәкилдәре ҡатнашлығында стратегик объекттарҙы һаҡлауҙы көсәйтеүҙе тикшерҙеләр.

Республика етәксеһе пилотһыҙ һауа суднолары ярҙамында террористик һөжүмдәрҙе кире ҡағыуҙа ҡулланылған техника һәм ҡорамалдар өлгөләре менән танышты. "Предприятиеларҙы пассив һаҡлау үҙенең һөҙөмтәле булыуын күрһәтә, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Беҙ өҫтәп бер нисә ҡарар ҡабул иттек һәм күкте һаҡлау бурысы йөкмәтелгән "БАРС" отрядтарын көсәйттек. Был эште артабан да камиллаштырасаҡбыҙ".

Башҡортостан Башлығы дошман БПЛА-лары һөжүменең көсәйеүенә бәйле өҫтәмә хәүефһеҙлек сараларын ҡабул итеү кәрәклеген билдәләне. "Һуңғы аҙнала дошман пилотһыҙ һауа суднолары ярҙамында бер нисә тапҡыр һөжүм итте. Республика биләмәһендә тәүге тапҡыр логистик үҙәк БПЛА-нан зыян күрҙе, - тине Радий Хәбиров. - Беҙ алдан уҡ ошондай объекттарҙы һаҡлау буйынса саралар ҡабул иткәйнек. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙың хужалары менән бергә кешеләрҙең һәм производстволарҙың именлеген тәьмин итеү буйынса өҫтәмә саралар күрергә кәрәк".

Ултырышта шулай уҡ иҡтисадтың бер нисә тармағының эше һәм инфраструктура объекттарын терактарҙан һаҡлау мәсьәләләре ҡаралды. Фекер алышыу йомғаҡтары буйынса предприятиелар һәм ойошмалар етәкселәре өсөн тейешле тәҡдимдәр әҙерләнде.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин Ҡырғыҙстанда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы саммитында ҡатнашты, шулай уҡ ике яҡлы осрашыуҙар үткәрҙе. Ҡырғыҙстанға эш сәфәре һуңында Рәсәй Президенты илебеҙҙең киң мәғлүмәт саралары вәкилдәренең һорауҙарына яуап биреп, мобилизацияның яңы тулҡынына ҡарата үҙ фекерен белдерҙе. Дәүләт Башлығы Дәүләт Думаһына һайлауҙарҙан һуң илебеҙҙә яңы мобилизация тулҡыны иғлан ителәсәге тураһында хәбәрҙең буш һүҙ булыуын белдерҙе. "Буш һүҙ. Был Рәсәйгә мәғлүмәт һөжүме", - тине Рәсәй Президенты журналистар менән аралашҡанда.

✓ Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров уҡыусыларға, ата-әсәләргә һәм педагогтарға яңы уҡыу йылы башланыуы айҡанлы ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе. Ул беренсе класс уҡыусыларына - яҡшы уҡыуҙарын, яңы дуҫтар табыуҙарын һәм сағыу тәьсораттар, өлкәнерәктәргә үҙ-үҙҙәренә ышаныуҙарын һәм нығлы белем алыуҙарын теләне. Сығарылыш кластары уҡыусыларына имтихандарға яҡшы әҙерләнергә кәрәк, алда уларҙы һөнәр һайлау һәм яңы, оло тормош көтә, тине.

✓ Башҡортостан Башлығы "Үҙебеҙҙең балалар" акцияһы хаҡында һөйләне. 1 сентябрҙә ошо акция сиктәрендә Башҡортостанда МХО ветерандары һәләк булған яугирҙарҙың балалары янында булды - уларҙы мәктәпкә оҙатты, ярҙам күрһәтте, бүләктәр тапшырҙы. "Беҙҙең өсөн сит балалар юҡ. Беҙҙең геройҙарҙың балалары - беҙҙең дә балалар. Уларҙы үҫтерергә һәм аяҡҡа баҫырға ярҙам итеү өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ. Шулай эшләү һәм шулай йәшәү - дөрөҫ һәм ғәҙел", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында үткән VIII Граждандар форумы 1000-дән ашыу кешене йыйҙы, шуларҙың 160-ы Рәсәйҙең 19 төбәгенән килгән спикерҙар ине. Сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Рәсәй Президенты кәңәшсеһе, РФ Президенты ҡарамағындағы Граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса Совет рәйесе Валерий Фадеев ҡатнашты. "Махсус хәрби операция шарттарында граждандар йәмғиәтен үҙгәртеп ҡороу" тип аталған пленар дискуссия уның төп ваҡиғаһы булды. Форумда 25 секция, шулай уҡ коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың иң яҡшы тәжрибәләре күргәҙмәһе, ҡул эштәре йәрминкәһе эшләне.

✓ 2026 йылдың 1 сентябренән илдең бөтә мәктәптәрендә дәрестә телефон ҡулланыу тыйыла. Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов ҡул ҡуйған бойороҡтан күренеүенсә, уҡыусы дәрестә һәм дөйөм белем биреү программаларын үҙләштергәндә гаджеттар менән файҙаланмаҫҡа тейеш. Был ғәҙәттән тыш йәки уҡыусыларҙың һәм мәктәп хеҙмәткәрҙәренең ғүмерена һәм һаулығына хәүеф янаған осраҡтарға ҡағылмай. Тәнәфестәрҙә гаджеттарҙы ҡулланыуҙы һәр мәктәп үҙе көйләй.

✓ *"Мөмкинлектән файҙаланып, Владимир Владимировичты тағы ла төп мәғариф объектын - Евразия ғилми-белем биреү үҙәге Вуз-ара студенттар кампусын асыуға саҡырҙым", - тине Радий Хәбиров.*

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



ТАҒЫ БЕР ЯҢЫ МӘКТӘП



Өфөнөң Глумилин-2 микрорайонындағы 1225 урынға иҫәпләнгән 88-се мәктәптең яңы корпусын асыуҙа Рәсәй Президенты Владимир Путин видеоконференция тәртибендә ҡатнашты.

Республика етәксеһе Радий Хәбиров дәүләт башлығына төбәгебеҙҙә мәғарифтың үҫеш хәле тураһында һөйләне, мөһим тармаҡҡа ярҙамы, ғөмүмән, Башҡортостанға, уның халҡына ҙур иғтибары өсөн рәхмәт белдерҙе. "Бөгөн асҡан мәктәп, ысынлап та, XXI быуатҡа хас заманса, ҙур, яҡты. Һәм уның ошондай берҙән-бер мәғариф усағы булмауы ла ҡыуандыра, - тине Радий Фәрит улы. - Яңы, матур мәғариф учреждениелары республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә барлыҡҡа килә. Шулай уҡ күп йылдар эшләгәндәренә лә яңы йәшәү һулышы бирәбеҙ. Был эштәр капиталь ремонт буйынса Президент программаһына ярашлы тормошҡа ашырыла".

Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, заманса эш алымы яҡшы һөҙөмтә бирә. Уңайлы шарттарҙа балалар уҡыуға яҡшыраҡ, яуаплыраҡ ҡарай. Был аныҡ һөҙөмтәләрҙән дә күренә: Берҙәм дәүләт имтихандары йомғаҡтарынан күренеүенсә, 100, 200 балл йыйғандар артҡандан-арта, Бөтә Рәсәй олимпиадаларында еңеүселәр, призерҙар күбәйә бара. "Мөмкинлектән файҙаланып, Владимир Владимировичты тағы ла төп мәғариф объектын - Евразия ғилми-белем биреү үҙәге Вуз-ара студенттар кампусын асыуға саҡырҙым. Уны ла беҙ Рәсәй Президенты ярҙамында төҙөйбөҙ. Ошо йылдың аҙағында асырға планлаштырабыҙ", - тине Радий Хәбиров.

ЯҢЫРЫУ - ҠЫУАНЫСЛЫ

Үткән аҙнала Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов баш ҡаланың бер нисә объектында булды.

Ҡала етәксеһе "Йәштәр һәм балалар" милли проекты сиктәрендә капиталь ремонт алып барылған белем биреү учреждениеларына айырыуса иғтибар бүлде. Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге 29-сы һәм 40-сы белем биреү үҙәктәрендә әлеге ваҡытта түшәмдәр, һаҡ һәм янғын сигнализацияһы системалары монтажланған, ишектәр ҡуйылған, иҙәндәр һәм стеналар, йылытыу системаһы яңыртылған.

Ф. Камаев исемендәге 2-се балалар сәнғәт мәктәбенең яңы филиалы ошо арала асылырға тейеш. Уның майҙаны 491,7 квадрат метр тәшкил итә. Филиалда музыка йүнәлеше фортепианола, гитарала, саксофонда һәм һуҡма инструменттарҙа уйнарға, эстрада һәм халыҡ йырҙарын башҡарыу оҫталығына өйрәтеүҙе үҙ эсенә ала. Шулай уҡ рәсем сәнғәте, график дизайны һәм анимация буйынса дәрестәр бирелә.

Рөстәм Шәрипов ҡала буйлап эш сәфәре барышында 89-сы мәғариф үҙәгендә лә булды. Дөйөм белем биреү учреждениеһында ремонт йорт төҙөлөшө алып барған эре ойошмаларҙың береһенең бушлай ярҙамы иҫәбенә башҡарылған. 575 урынға иҫәпләнгән мәктәптең өс ҡатлы бинаһы 1961 йылда төҙөлгән, 2019 йылда унда капиталь ремонт үткәрелгән. Түләүһеҙ ярҙам тураһында килешеү нигеҙендә был юлы ла бик күп эштәр башҡарылған. Был эштәр мәғариф үҙәгенә уҡыусылар һанын 50-гә арттырырға мөмкинлек биргән.

- Бөгөн беҙ социаль объекттарға айырым иғтибар бүлдек. Белем биреү учреждениелары балаларҙы яңыртылған һәм сағыу төҫтә ҡаршы алһын өсөн дөйөм тырышлыҡ менән мөмкин булғандың барыһын да эшләйбеҙ. Капиталь ремонт программаһына бәйле Өфөнөң 16 белем биреү учреждениеһы балаларға яңы форматта асыла, - тине Рөстәм Шәрипов эш сәфәренә йомғаҡ яһап.

ҮҘЕБЕҘ ТАҘАРТАЙЫҠ!

Өфө мэрияһында биләмәләрҙе санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса көҙгө айлыҡтың башланыуы хаҡында иғлан иттеләр.

Ул 1 ноябргә тиклем бара, тип асыҡлыҡ индерҙеләр муниципалитетта. Айлыҡ барышында санитар йомалар ойошторола. "Дөйөм ҡала өмәләре 12 һәм 26 сентябргә планлаштырылған. Шулай уҡ "Йәшел Башҡортостан" акцияһының көҙгө этабы була, - тип һөйләнеләр Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәтендә. - Өфөләр һәм предприятиеларҙың, ойошмаларҙың, учреждениеларҙың хеҙмәт коллективтарын тыуған ҡалабыҙҙың биләмәһен таҙартыуға үҙ өлөшөн индерергә саҡырабыҙ". Таҙартыу эштәре барышында геморрагик биҙгәк буйынса эпидемиологик хәлде иҫәпкә алырға кәрәк: битлек һәм бирсәткә кейеү, ҡулдарҙы дезинфекциялау мөһим. Айырыуса урмандарҙа, парктарҙа һәм юл буйҙарында эшләгәндә хәүефһеҙлек техникаһын үтәү зарур.

ОЛИМПИЯ РЕЗЕРВЫ СТАТУСЫ

Өфөнөң 34-се спорт мәктәбе олимпия резервы мәктәбе статусын алды. Был хаҡта мәктәп директоры Виктор Кузнецов республикала волейбол үҫешенә арналған матбуғат конференцияһында хәбәр итте.

Мәктәптең төп дисциплинаһы - волейбол. Тәрбиәләнеүселәр республика һәм Бөтә Рәсәй ярыштарында юғары урындар биләй. Мәҫәлән, 2013-2014 йылдарҙа тыуған малайҙар командаһы үткән миҙгелдә Рәсәй беренселегенең зона этабын уңышлы үтте, ярымфиналға сыҡты һәм бишенсе урын яуланы. 2012-2013 йылдарҙа тыуған үҫмерҙәр, шулай уҡ зона этабын уңышлы үтеп, ярымфиналда сығыш яһаны һәм дүртенсе урынға сыҡты. "Быйыл бөтә беренсе урындарҙы беҙҙең мәктәп яуланы. Мартта Ижевскиҙа 2012-2013 йылғы үҫмерҙәр араһында Волга буйы федераль округы беренселеге үтте, унда беҙҙең команда 12 команда араһында бишенсе урын алды. 2011-2012 йылдар йыйылма командаһы финалда ҡатнаша. Команда, Татарстандың һәм Белгород өлкәһенең көслө йыйылма командаларын уҙып, 11-се урынды биләне. Йыйылма составына Өфө мәктәптәре уҡыусылары ғына түгел, Мәләүез һәм Күмертау ҡалалары мәктәптәре тәрбиәләнеүселәре лә инә", - тип һөйләне Кузнецов.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

ХЕҘМӘТ ШАРТТАРЫ ЯҠШЫ



Махсус хәрби операция биләмәһендә пилотһыҙ бәләкәй авиация - ул юғары технологиялы фронт һыҙығы. Алдынғы был ғәскәр төрөндә хеҙмәт айыҡ аҡыл, инженерлыҡ һәләтен һәм тиҙ ҡарар ҡабул итеү талабын ҡуя.

БПЛА операторы хеҙмәт осоронда пилотаж һәм программалау нескәлектәренән алып, аппараттарҙы ҡатмарлы техник хеҙмәтләндереү, хатта 3D-моделләштереү кеүек үҙенсәлекле һәләткә эйә була. Алған тәжрибә оборона секторында ла, гражданлар индустрияһында ла юғары баһалана. Был бигерәк тә техник белем биргән юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн мөһим. Ә контракт белем алыу процесын оҙайлы ваҡытҡа өҙмәйенсә, хеҙмәтте уҡыу менән берләштерергә мөмкинлек бирә.

Юғары уҡыу йортонда алған белем яңы техниканы үҙләштереүҙе күпкә еңеләйтә, юғары технологиялы ҡорамалдар менән эшләү өсөн ышаныслы нигеҙ булып тора.

Элекке студент, "Малой" позывнойлы яугир, инде бер йылға яҡын алғы һыҙыҡта. Контракт тамамланғандан һуң ул университетҡа ҡайтырға иҫәп тота. Буласаҡ инженер, хеҙмәтем пилотһыҙ системаларҙы ҡулланыу үҙенсәлектәрен тәрәнерәк аңларға ярҙам итәсәк, ти ул һәм яу ҡырына юлланырға ниәтләнгән егеттәргә үҙ кәңәштәрен бирә. "Әлбиттә, физик, психологик, беренсе ярҙам кеүек махсус әҙерлек уғата мөһим. Сыҙамлыҡ, кешеләр менән мөнәсәбәт ҡора һәм аңғәмәсеңде тыңлай белеү, әйткән һүҙеңдә тороу кеүек шәхси сифаттар юғары баһалана. Яҡындарың менән даими бәйләнештә булыу рухи көс бирә. Бында ныҡ характерҙы, рухы ныҡлыҡты, уйлап эш итеүселәрҙе ҡәҙерләйҙәр", - ти "Малой".

Әйткәндәй, Башҡортостанда Муса Ғәрәев исемендәге пилотһыҙ системалар батальонын тулыландырыу дауам итә. Яңы подразделение контрактсылары, шул иҫәптән ғаилә ағзалары федераль һәм республика льготаларынан файҙаланыу хоҡуғына эйә. Яугирҙар өсөн өҫтәмә өҫтөнлөктәр ҙә бар. Дрон операторҙары өсөн төп өҫтөнлөк - алғы һыҙыҡтан алыҫта хеҙмәт итеү. Йәғни батальондың шәхси составы фронттың алғы һыҙығына ебәрелмәй.

Контракттың төп шарты буйынса, БПЛА операторын башҡа подразделениеларға күсереү тыйыла. Хеҙмәт итеү ваҡыты аныҡ билдәләнгән һәм ул теүәл бер йыл тәшкил итә. Аҙаҡ яугир тыныс тормошҡа ҡайта йәки Оборона министрлығы менән яңы контракт төҙөй ала.

Хәрби хеҙмәткәрҙәргә контрактҡа ҡул ҡуйғандан һуң һәм 180 көн хеҙмәт иткән һайын - 200 мең, шулай уҡ, эш хаҡынан тыш, көнөнә ике мең һум өҫтәп түләнә. Хеҙмәттең беренсе йылында килем 4 120 000 һум тәшкил итә. Һайлап алыу һәм контракт төҙөү шарттары буйынса тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефондар: +7 (908) 358-00-00 һәм +7 (995) 948-65-41.

Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Республика мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин билдәләүенсә, Башҡортостан Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу өсөн тәбиғи фәндәр циклы предметтарын һайлау буйынса илдә алдынғы урынды биләй. Быйылғы имтихан кампанияһы һөҙөмтәләре буйынса профилле математика, информатика һәм тәбиғәт фәндәрен һайлаған сығарылыш уҡыусыларының өлөшө 41,82 процент тәшкил иткән. Был Рәсәй Хөкүмәте бойороғо менән 2030 йылға ҡарата 35 процент кимәлендә билдәләнгән маҡсатлы күрһәткестән күпкә юғарыраҡ.

✓ 1 сентябрҙән республиканың дөйөм белем биреү ойошмалары "Мәскәү электрон мәктәбе" (МЭШ) платформаһы нигеҙендә булдырылған "Минең мәктәбем" федераль белем биреү системаһына күсә башлай. Яңы электрон көндәлек ярҙамында ата-әсәләр баланың нисек уҡыуын, ниндәй баһа алыуын, өйгә бирелгән эштәрен, дәрестәрҙе ҡалдырыу-ҡалдырмауын белеп торасаҡ. Системаға инеү Дәүләт хеҙмәттәре порталының (ЕСИА) иҫәп яҙмаһы аша тормошҡа ашырыла.

✓ Башҡортостан Башлығы хәрби бурысын үтәгәндә батырлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ күрһәткән МХО югирҙарын бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Ике яҡташыбыҙ генерал Шайморатов орденына лайыҡ булды. Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе ваҡытында уҡсылар взводы командиры урынбаҫары Айнур Вәлиевҡа һәм батальон командирының ҡоралланыу буйынса урынбаҫары Фидель Ғилметдиновҡа дәүләт наградаларын тапшырҙы.

✓ Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Ҡытайҙа иҡтисад буйынса халыҡ-ара олимпиадала көмөш призёр булған Стәрлетамаҡтың 3-сө башҡорт лицей-интернаты уҡыусыһы Руслан Әминев Башҡортостан Башлығының Рәхмәт хаты менән бүләкләнде. "Был - абруйлы халыҡ-ара олимпиада. Дөйөм тырышлыҡ менән республиканың олимпиада хәрәкәте буйынса иң яҡшы бишәү иҫәбенә инеүенә өлгәштек. Был республикабыҙҙа урта белем биреү сифатының мөһим күрһәткесе булып тора", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ Ҡырғыҙстанда 31 августан 6 сентябргә тиклем VI Бөтә Донъя күсмә халыҡтар уйындары үтә. Оло халыҡ-ара сара донъя күсмә халыҡтарының традицион спорт төрҙәрен һәм мәҙәни мираҫын берләштерә. Унда Башҡортостандан милли кейем дизайнерҙары Гөлсөм Хөсәйенова, Артур Иҫкужин һәм ювелир сәнғәте оҫтаһы Мария Махнева-Метусова үҙҙәренең коллекциялары менән ҡатнаша. "Грандиоз халыҡ-ара фестиваль сиктәрендә йәш дизайнерҙар араһында конкурс уҙғарыла. Бөтә илдән дәғүәселәр араһынан этнодизайнер Артур Искужиндың кандидатураһы тәҡдим ителгән, ул ошо конкурста Рәсәй намыҫын яҡлаясаҡ.

✓ *Фән, технологиялар үҫешкән һайын кешене кеше иткән иң гүзәл сифаттар юғала, мәрхәмәтле, илһөйәр, йылмайып йәшәгәндәр кәмегәндән-кәмей һымаҡ күренә.*

ИШАРА

ҮҘЕБЕҘСӘ УЙЛАЙЫҠ,

үҙебеҙсә йәшәйек



Шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың "Урал урманы" шиғырында: "Ҡарағайҙар һәм беҙ ҡырағайҙар, Бергә үҫтек, бергә шауланыҡ. Сәнғәт серен, юҡ һүрәттән түгел, Тәбиғәттән генә яуланыҡ", - тигән юлдарын уҡынымда, "Ниңә әле беҙ сит илдәр фәлсәфәһен, психологияһын үҙ итәбеҙ, улар тураһында уҡырға яратабыҙ, хатта улар фекере алдында баш эйәбеҙ?" - тип уйлап ҡуйҙым. Шунан уйымдан ғына: "Мин башымды сит ил фекере менән тултырмай, саф башҡортса фекерләгем, башҡорт аҡылы менән йәшәгем килә!" - тип ҡырт киҫеп ҡуйҙым.

Һәр саҡ шуны шәйләйем: журналистар, яҙыусылар үҙҙәрен бик тиҫкә, белемле итеп күрһәткеләре килһә, яҙған яҙыуҙарында һәр саҡ сит ил вәкиленең китабынан миҫал, әйтем, өҙөк килтерә. Бер саҡ телевизион тапшырыуҙа йәш кенә журналист ҡыҙыҡай космонавт Гречконан интервью ала: "Космоҫҡа осоу, фәндең әүҙем үҫеше, юғары технологияларға ҡарашығыҙҙы белгем килә?", - тигән булды һорауы. Космонавт: "Минең уйым буйынса, кешеләр юҡҡа ғына үҙ мәмерйәләрен ташлап сыҡҡан. Йәшәһендәр ине һаман таштарға һүрәттәр төшөрөп, һунарға йөрөп, саф һыу эсеп, саф һауа һулап, усаҡ тирәләй һикереп бейеп, йырлап..."- тип көлдөрөп алды.

Был шаяртыу ғына, әлбиттә, ләкин беҙҙең йәнебеҙ әрнеүе, йәнебеҙ ауазы ла бар ул шаяртыуҙа. Фән, технологиялар үҫешкән һайын кешене кеше иткән иң гүзәл сифаттар юғала, мәрхәмәтле, илһөйәр, йылмайып йәшәгәндәр кәмегәндән-кәмей һымаҡ күренә. Космонавт Гречко көлөп һөйләһә лә, саф һауа, саф һыу бөтәбеҙҙең дә хыялы ғына булып бара бит.

Көнбайышҡа, Америкаға оҡшарға тырышыу, уларса тиҫкә булырға, уларса йәшәргә, уйларға ынтылыу балаларыбыҙҙы, йәштәребеҙҙе ҡайҙа алып бара? Йыш ҡына беҙ, өлкәндәр ҙә, был хәлдең эҙемтәләре тураһында уйламайбыҙ, йәш быуынға үҙ халҡыбыҙҙың аҡыл байлығына таяныу, ул байлыҡты юғалтмау мөһим икәне тураһында һөйләүҙе, аңлатыуҙы кәрәкле тип тапмайбыҙ бит.

Үҙемдең тормошомдан бер ҡыҙыҡ хәлде яҙайым әле. "Будь здоров!" тигән бер гәзиттә нисек медитация хәленә инеп, һаулығыңды яҡшыртырға өйрәттеләр. Йәнеңдең, аңыңдың тәнеңдән осоп сығыуына өлгәшеү ысулдарын уҡып, сеансҡа ултырҙым, гәзиттә яҙылған күнекмәләрҙе еренә еткереп үтәнем. Тын ғына ултырам. Ойоғандай булдым. Бер саҡ бәләкәй бүлмәмдең иҙәне өҫтөнә әкренләп һыу ҡалҡа башлағанын тоям. Үтә күренмәле, таҙа, саф һыу. Ул һыу бөтә бүлмәне тултырғандай, өҫкә ҡалҡа барғандай тойола. Һыу күтәрелеп минең тубығыма етте тигәндә, ҡурҡыу тойғоһонан тертләп китеп, медитация хәленән сыға һалдым. "Күккә осаһың, имеш, тип яҙғайнылар был медитация мәлендә, ә мин һыуға бата яҙҙым", тип көлөп тә алдым һуңынан. Ә йәнең күккә оса, уны кире тәнеңә ҡайтара алмай куйһаң, бөттө баш, тип, теләһә ниндәй сит ил күнекмәләре менән ҡыҙыҡһыныуымды туҡтаттым...

Былар менән ни әйтмәксемен? Үҙ-үҙеңә генә йомолоп йәшәргә саҡырмайым. Көнбайыш фекерҙәрен уҡырға, тыңларға, әммә үҙебеҙсә фекерләргә, йәшәргә кәрәк! Һәр милләт, һәр ил үҙ үҙенсәлеген һаҡлап ҡалып, үҙ юлы менән үҫешһен. Шул саҡ күп төрлөлөк үҙе гүзәл байлыҡ булыр.

БЫНАҒАЙЫШ!

ҠОШ-ҠОРТҠА "ПАСПОРТ" БИРӘЛӘР!

1 сентябрҙән Рәсәйҙә тауыҡ, ҡаҙ һәм өйрәк, ғөмүмән, барлыҡ йорт ҡоштары иҫәпкә ҡуйылырға тейеш.



Ысынмы-юҡмы был хәбәр? Башҡортостанда шәхси ярҙамсы хужалыҡ алып барыусылар һуңғы көндәрҙә, тауыҡтарҙы йәки ҡаҙҙарҙы иҫәпкә ҡуйырға кәрәкме, тигән мәсьәләне әүҙем тикшерә? Бынан тыш, социаль селтәрҙәрҙә фермерҙарҙың, Күп функциялы үҙәккә йорт ҡоштары менән килеп, уларҙы теркәүҙәре тураһында видеояҙмалар һала. Шуға күрә ҡайһы берәүҙәр был яңылыҡты ялған тип уйлай.

Әммә был фейк түгел. Ысынлап та, 1 сентябрҙән Рәсәйҙә тауыҡтарҙы, өйрәктәрҙе, ҡаҙҙарҙы, күркәләрҙе, бүҙәнәне һәм башҡа ҡош-ҡортто мотлаҡ маркировкалау талаптары көсөнә инде.

Кемдәргә ҡағыла? Кемдең хужалығында 10-дан ашыу ҡош бар, тимәк, уларҙы иҫәпкә ҡуйырға кәрәк. Һәр ҡошҡа айырым "паспорт" бирелмәй, улар төркөм менән теркәлә һәм дөйөм идентификация номеры ала.

Маркировкалау ҡағиҙәләрен үтәү өсөн тауыҡтарҙы һәм башҡа ҡоштарҙы, шаян видеоларҙағы кеүек, Күп функциялы үҙәккә алып барырға түгел, ә урындағы ветеринария станцияһына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Унда ҡоштар тураһында мәғлүмәт махсус "Хорриот" системаһына индерелә.

Хужа ветеринарҙарға түбәндәге мәғлүмәттәрҙе бирергә тейеш: ҡош сығарылған яҡынса дата, тотоу шарттары, хужаһы тураһында мәғлүмәт, дауалау һәм иҫкәртеү сараларының үткәрелеүе. Артабан ветеринария хеҙмәтенә ҡош һанының һәр үҙгәрештәре тураһында хәбәр итергә кәрәк буласаҡ. Мәҫәлән, яңы себештәрҙең сығыуы, ҡоштарҙың үлеүе, хужаның йәки тотоу урынының үҙгәреүе тураһында. Бер тауыҡты төшкә ашҡа тип һуйып таҙалап алған осраҡта ла...

"Хорриот" системаһына килгәндә, ул - дәүләт мәғлүмәт системаһының компоненты, малды, ҡош-ҡортто, башҡа йорт хайуандарын иҫәпкә алыу, үткәрелгән профилактик, диагностик (лаборатория тикшеренеүҙәренән тыш), дауалау һәм башҡа саралар, сикләү сараларын, мәҫәлән, карантин асыу йәки ябыу тураһында мәғлүмәт биреү өсөн тәғәйенләнгән.

Күпме түләргә һуң? "Хорриот" системаһына индереү хеҙмәте бушлай. Әммә һәр хужа үҙ иҫәбенә ҡоштар тотолған һарайға ҡуйыу өсөн ныҡлы материалдан алтаҡта эшләргә тейеш. Унда ҡош-ҡорттоң тоҡо-

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

ЮЛЫ ЛА, ӘМӘЛЕ ЛӘ БАР...

тик теләк кәрәк!

(Башы 1-се биттә).

Ә бына ауыл клубының мәҙәниәт хеҙмәткәре "Киске Өфө"нөң 32-се һанын һорап алып китте, сөнки унда "Тарих ярсыҡтары" рубрикаһында сыҡҡан "Георги башҡорттар хаҡында" мәҡәләһендә башҡорт туйҙары һәм байрамдары хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар: ҡалым, никах тәртибе, башҡорт уйындары: ат сабыштырыу, сәпкә уҡ атыу, йырлау, шулай уҡ ата йорто менән хушлашыусы кәләштең сеңләү кеүек йолалары бәйән ителә. Клуб мөдире ауылыбыҙҙың ошо араларҙа никахҡа инергә йыйынған йәштәре менән боронғо туй тамашаһы үткәрергә әҙерләнә. "Киске Өфө" клубҡа был ярты йыллыҡта килмәһә лә, ауыл китапханаһында бар ул, ләкин унда эшләүсе Гөлдәр һылыу гәзитте шулай уҡ ҡәҙерләп һаҡлай: уны ҡулдан-ҡулға йөрөтмәй, килеп ултырып, төпләмәнән уҡырға ҡуша һәм дөрөҫ эшләй, сөнки гәзиттәр бөгөн үҙенә күрә "дефицит"ҡа әйләнде, хатта күрше әбей әйтмешләй, әйбер төрөргә лә ҡалманы.

Күпселектең хәҙер гәзиткә яҙыла алмауын аңларға ла була: хаҡтар артҡандан-арта бара бит. Исмаһам, халҡыбыҙға белем-нур сәсеүсе, яңылыҡтар хәбәр итеүсе, боронғоно хәтергә төшөрөп тороусы ана шул гәзиттәргә яҙылыуҙа ташламалар булдырылһа ине, сөнки бер дана гәзит хаҡы хәҙер меңдән ашыу тора. Ә ауыл халҡы өсөн ул да ҙур аҡса. Өҫтәүенә, район гәзитенә мотлаҡ яҙылыу кәрәк, шуға күрә тағы берҙе - республика баҫмаһын да алдырайым тиһәң һәм шул ыңғайҙан почтала газ, электр уты, сүп-сар өсөн түләп ҡотолһаң, икенсе дана гәзиткә бик теләгән хәлдә лә арттырып булмай...

Был йәһәттән интернет менән дуҫтар өсөн еңелерәк: теләге булған кеше гәзиттәрҙең онлайн вариантын уҡый. Мин дә шулай эшләй алам, әлбиттә, ләкин теләмәйем. Миңә ҡағыҙ гәзитте ҡулға тотоп, күҙҙе сыбарлаусы онлайн рекламаларынан ҡасып, иркенләп, аулаҡлап, тәмләп ултырып уҡырға кәрәк. Унан һуң тәбиғи һорау тыуа: үҙебеҙҙең туған телебеҙҙә сыҡҡан баҫмалар кем өсөн һуң? Беҙ алдырмаһаҡ, уҡымаһаҡ, урыҫ хал-

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Сауҙа министрлығы 1 сентябрҙән 30-на тиклем финанс хеҙмәттәрен ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау мәсьәләләре буйынса "ҡыҙыу линия" үткәрә. "Беҙҙең белгестәр теләгән һәр кемгә финанс хеҙмәттәре күрһәтеү йәһәтенән ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлауға бәйле мәсьәләләр буйынса консультациялар, шулай уҡ финанс грамоталыҡ һәм үҙ аҡсаңды дөрөҫ тотоноуға бәйле кәңәштәр бирәсәк", - ти сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Константин Климин. Теләгән һәр кем эш көндәрендә 8 (347) 218-09-78 телефоны буйынса бушлай консультация ала ала.

✓Республикала Рәсәй география йәмғиәте, Рәсәй ҡоштарҙы һаҡлау союзы һәм ЮНЕСКО-ның "Янғантау" геопаркы белгестәре торналар иҫәбен ала. Көҙөн һоро торналар көньяҡҡа осоп китеү алдынан ҙур туптарға йыйыла. Ҡыҙыл китапҡа ингән ҡоштарҙың миграция юлдарын өйрәнеү өсөн ҡоштарҙың тупланыу урындарын белеү мөһим. Әгәр торналарҙың йөрөгән урынын күрһәгеҙ (ғәҙәттә, улар баҫыуҙарға йәки һаҙлыҡтарға төшә), был хаҡта орнитологтарға хәбәр итергә кәрәк. Күргән (ниндәй тораҡ пункт янында) урын, көнө һәм ваҡыты, тупта күпме ҡош булған - белгестәр өсөн ошо мәғлүмәттәр мөһим.

✓31 августан Дәүләт хеҙмәттәре порталында "Һанлы тигеҙһеҙлекте бөтөрөү 2.0" проекты буйынса тауыш биреү бара. Республика һәр кем юғары тиҙлекле интернет һәм мобиль бәйләнеш үткәреү талап ителгән ауылды һайлай ала. ҺР Дәүләт идараһының һанлы үҫеш министрлығы етәксеһе Геннадий Разумикин һүҙҙәренсә, 2021 йылдан республиканың һуңғы 350 ауылында сифатлы мобиль интернет барлыҡҡа килде. Былтырғы тауыш биреү йомғаҡтары буйынса 2026 йылда тағы 51 ауылда телекоммуникация ҡорамалы ҡуйылласаҡ. Тауыш биреү 8 ноябргә тиклем бара.

✓Радий Хәбиров фән һәм техника өлкәһендә дәүләт премияларын тапшырыу тәртибенә үҙгәрештәр индереү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, фән һәм техника өлкәһендә һәр берәһе бер миллион һум күләмендә өс дәүләт премияһы билдәләнә. Элек ул 500 мең һум тәшкил иткән. Шулай уҡ дәүләт премиялары буйынса комиссия составы ла яңыртылды. Рәйес итеп республика Башлығы хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Искәндәр Әхмәтвәлиев раҫланды. Фән һәм юғары белем биреү буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Мостафина - уның урынбаҫары, ошо уҡ комитет рәйесенең беренсе урынбаҫары Азат Фәттәхов яуаплы секретары итеп тәғәйенләнде.

✓Асҡын районы Асҡын һәм Урмияҙ ауылдарында мәсет асылды. Район үҙәгендәге "Нур" мәсете яңы рухи үҙәк, район халҡы өсөн намаҙ, мәғрифәтселек, аралашыу һәм изге эштәр урыны буласаҡ, тип билдәләне Асҡын районы хакимиәте башлығы Динис Йосопов тантана барышында. Сараларҙа Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе, Рәсәйҙең Юғары мөфтәйө Тәлғәт Тажетдин ҡатнашты.

✓ ***Почталарға әллә ней булған: улар гәзит һәм башҡа төрлө корреспонденция таратыуҙы төптө онотто - бер-ике дана өсөн йөрөмәйбеҙ, тиҙәр, сөнки ҡала почта бүлексәләрендә кадрҙар етешмәй, ҡыҫҡартып бөттөләр.***

мо, маркировкалау датаһы, хужаһы тураһында һәм башҡа мәғлүмәт урынлаштырыла.

Яңы талаптар үтәлмәгән осраҡта... 1 сентябрҙән тиҫтәнән ашыу ҡош тотҡан һәр кем маркировкалау үтергә тейеш. 2029 йылдан был талап аҙ һанлы ҡош-ҡорт хужаларына ла ҡағыласаҡ. "Эйе, шәхси хужалыҡ алып барыусылар ветеринария ҡағиҙәләрен үтәргә тейеш. Тәүге көндәрҙән үк маркировка булмағаны өсөн бер кемгә лә штраф һалырға йыйынмайбыҙ. Россельхознадзор белгестәре тәү сиратта иҫкәртеү сараларын үткәрәсәк, иҫәпкә ҡуйыу кәрәклеген аңлатасаҡ", - ти Башҡортостан Ветеринария һәм фитосанитария күҙәтеүе буйынса федераль хеҙмәтенең эске ветеринария күҙәтеүе бүлеге начальнигы Ләйсән Хәкимова.

Нимәгә ул бындай иҫәп-хисап? Ҡоштарҙы маркировкалау - РФ Хөкүмәтенең 2023 йылда ҡабул ителгән "Хайуандарҙы иҫәпкә алыу ҡағиҙәләрен һәм индивидуаль йәки төркөмләп маркировкаланырға һәм иҫәпкә алынырға тейешле хайуан төрҙәре исемлеген, хайуандарҙы индивидуаль йәки төркөмләп маркировкалау һәм иҫәпкә алыу осраҡтарын, шулай уҡ хайуандарҙы иҫәпкә алыуҙы тормошҡа ашырыу ваҡытын раҫлау тураһында" 550-се ҡарарын тормошҡа ашырыуҙың һуңғы этабы ул.

Быға тиклем махсус сервис аша этаплап һыйыр малы, аттар һәм суҫкалар, 2025 йылдың 1 сентябренән ҡуян, бал ҡорто, ҡыйбат тиреле хайуандар маркировкаланған. Хәҙер - ҡош-ҡорттарҙың сираты. Шулай уҡ 1 сентябрҙән шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙа тотолған дөйәләрҙе һәм боландарҙы маркировкалау ҙа мотлаҡ.

Был сара хужалыҡтарҙың биологик хәүефһеҙлеген арттырыуға йүнәлтелгән. Иҫәп-хисап мал һанын күҙәтергә һәм йоғошло ауырыуҙарҙың таралыуын булдырмаҫҡа, ахыр сиктә, ҡошсолоҡ продукцияһы хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә етди аҙым булып тора.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Дәүләт Думаһы Хөкүмәткә хайуандарҙы иҫәпкә алыу ҡағиҙәләре тураһында үҙ ҡарарына, уларҙың төрҙәре исемлегенә, шулай уҡ бының өсөн срокторға төҙәтмәләр индерергә тәҡдим итте. Парламенттың түбәнге палатаһы рәйесе Вячеслав Володин әйтеүенсә, уларға был норматив-хоҡуҡи актты тормошҡа ашырыу буйынса халыҡтан күп мөрәжәғәттәр килә. Шуға күрә депутаттар уның ҡайһы бер положениеларын төҙәтергә йәки юҡҡа сығарырға тәҡдим иткән. "Шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙы үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырырға, ә контроль һәм санитария именлеге өсөн көрәш эгидаһы аҫтында ауыл халҡы, депутаттар, эксперттар менән алдан дөрөҫ фекер алышырға кәрәк булған ҡарарҙар ҡабул итергә кәрәк. Шунан һуң ошондай ҡарарҙар кәрәкме-юҡмы икәнен ҡарарға", - тип иҫәпләй Дәүләт Думаһы спикеры.

ҡына кәрәкмәй бит улар! Уларҙың үҙҙәреneке етерлек һәм, әйткәндәй, район үҙәктәрендә, ҡалаларҙа халыҡ, айырыуса өлкән йәштәгеләр һаман да ҡағыҙ гәзиттәргә тоғро ҡала. Быйыл йәй отпускымда Өфөлә йәшәүсе ҡыҙыма барғанда, уларҙың йорто эргәһендәге "Өфөпечать" киоскыһына эйәләшеп киткәйнем. Ҡарап торам, 15 минут эсендә минән һуң биш кеше килеп, "Аргументы и факты", "Комсомольская правда", "Российская газета" һатып алып китте. Бәхеткә, шулар араһында бер өлкән ир "Башҡортостан" гәзите менән "Ағиҙел" журналы алды. Шул кешегә эстән генә рәхмәт әйтеп, ҡыуанып тороп ҡалдым.

Бына шундай хәлдәр. Әйткәндәй, бөгөн беҙҙең интеллигенция вәкилдәре, айырыуса уҡытыусылар, ғалимдар, яҙыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре өйҙәренә гәзит алдырмай, шуныһы аптырата. Бер яҡтан, ошо "Киске Өфө" гәзитенең баяғы 32-се һанында яҙылыуынса, почталарға әллә ней булған: улар гәзит һәм башҡа төрлө корреспонденция таратыуҙы төптө онотто: бер-ике дана өсөн йөрөмәйбеҙ, тиҙәр, сөнки ҡала почта бүлексәләрендә кадрҙар етешмәй, ҡыҫҡартып бөттөләр. Почтаһын да ябып ҡуймағайҙары, тип һөйләне ҡыҙым. Бында бер юл бар, әлбиттә: милли гәзиттәребеҙҙе күтәрмәләргә теләге булғандар гәзитте үҙҙәре эшләгән ойошмаға яҙҙырып та алдыра ала бит! Минең ҡыҙым шулай эшләй: уҡытҡан мәктәбенә яҙҙырып алып ҡайта, сөнки ойошма-учреждениеларға, офистарға почтальондар, курьерҙар мотлаҡ почта килтереп китә. Әйҙәгеҙ, юлынәмәлен табайыҡ, яҙылайыҡ, уҡыйыҡ, үҙебеҙҙең башҡорт донъяһында барған хәл-әхүәлдәр менән хәбәрҙар булайыҡ, замандаштар!

Рәсимә АҪЫЛБАЕВА,
уҡытыусы.
Дәүләкән районы.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

РЭТКЛИФФ НИҢӘ МӘСКӘҮГӘ КИЛДЕ?

"Киев ут эсендә, - тип яҙа "АиФ" аҙналығы хәбәрсеһе.- Ленинград, Ростов өлкәләренә, Wildberries менән Озон компанияларының логистик үҙәктәренә һәм башҡа граждандар объекттарына украин дрондары һөжүме яуапһыҙ ҡалмай"



Әйе, Украина Ҡараллы көстәренең Ҡара диңгеҙҙән алып Киевҡаса һәм артабанғы объекттары утҡа тотола. Беҙҙең яңы реактив "Герань"дар 1000 км аралыҡҡа оса. Дошман үҙенең предприятие һәм складтарын йәшереп тотҡан Ровно, Луцк, Волынь ҡалаларын ут солғаны. Зеленский үҙе таныуынса, бөтөн был объекттар граждандар йәшәгән торлаҡ кварталдары араһында йәшерелгән, шуға күрә яуаплылыҡ та уның елкәһенә төшә. Рәсәй армияһы үткән аҙнаның һуңғы ике көнө буйына Киев һәм уның яныndағы райондарҙы утҡа тотоп, хәрби-сәнәғәт объекттарын, шулай уҡ "Фламинго" өсөн деталдәр наҡланған складтарҙы, НАТО ракеталарын юҡ итте.

Бынан тыш, 30 август төнөндә Рәсәй яугирҙары Киевтың ВСУ мәнфәғәтендә эшләүсе сәнәғәт предприятиеларына, шул иҫәптән, дрондар етештереүсе фәнни-техник һәм инженер компанияһы өсөн шартлатҡыс матдәләр һаҡланған склад биналарын юҡ итте.

Ә был ваҡыт Рәсәй Ҡараллы көстәренең "Үҙәк" ғәскәрҙәр төркөмө Доброполье ҡалаһы өсөн барған нығыштарҙың ахырғы осорона әҙерләнә. Төркөм яугирҙары ҡала яны биләмәһенә сығып, дошманды өс яҡлап ҡамауға алмаҡсы. Ә был ҡаланы 3 меңләп украин боевигы оборонала тота, ләкин сентябрь айы Доброполье яҙмышында хәл иткес осор буласаҡ.

Шулай ҙа сәйәси күҙәтеүселәр Украина Ҡараллы көстәренең был участкаға ҙур иғтибар бүлеүен һәм унда байтаҡ ҡына өҫтәмә көс йүнәлтеүенән сығып, дошман ҡаланы еңел генә бирмәйәсәк, тигән фекерҙә, сөнки Доброполье - Донбастың етди сәнәғәт үҙәге. Ул дошман тарафынан тотошлай тип әйтерлек терәк пункттар селтәренә әйләндерелгән.

Хәрби бәрелеш дауам итә, ә шулай ҙа төрлө тарафтан Рәсәй менән Украина араһындағы диалог мөмкинлегенә ишаралаусы белдереүҙәр ишетелә тора. Мәҫәлән, үткән аҙна башында АҠШ-тың Рәсәйгә киләп киткән Үҙәк разведка идаралығы (ЦРУ) башлығы Джон Рэтклифф, әллә ысынтылап, әллә һынамаҡҡа, ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатыуҙы кәрәк тапты. РФ Президенты Владимир Путин менән күҙмә-күҙ күрешмәһә лә, Рәсәйҙең Тышҡы разведка хеҙмәте (СВР) директоры Сергей Нарышкин менән осрашыуында АҠШ, Рәсәй һәм Украина президенттарының өс яҡлы саммитын ойоштороу хаҡында тәҡдимен белдерҙе.

Axios баҫмаһы яҙып сығыуынса, ЦРУ башлығы Мәскәүгә визиты мәлендә ике ил разведкаһы етәкселеге булышлығында Владимир Путинды Украина менән һөйләшеүҙәрҙе тергеҙеү мәсьәләһенә инандырыу мөмкинлеген дә байҡаған, имеш. The Wall Street Journal баҫмаһы яҙып сығыуынса, АҠШ президенты Дональд Трамп Украина буйынса һөйләшеүҙәрҙе тергеҙергә тырыша һәм үҙенең яҡын ярҙамсыларынан йәшерен рәүештә Джон Рэтклиффты Мәскәүгә тап ана шул маҡсатта ебәргән дә инде. Америка мәғлүмәт саралары хәбәр итеүенсә, ЦРУ башлығының был визиты НАТО буйынса уның союздаштарына ҡарата Рәсәйҙең әҙерлек хәбәре сәбәпсе булғандыр.

Икенсенән, Рэтклифф үҙенең визитын Рәсәйҙе Иранға ярҙамы өсөн иҫкәртеү булараҡ файҙаланды, тип тә яҙҙы сит ил матбуғат саралары. Киев иһә сентябрҙә АҠШ аралашсылығында Рәсәй менән һөйләшеүҙәр мөмкинлеген белдерҙе, ләкин хәрби хәрәкәттәрҙе туҡтатыу Рәсәй планына инмәй, тип хәбәр итте киң мәғлүмәт сараһына әңгәмәһендә РФ Президенты ярҙамсыһы Юрий Ушаков. Шулай уҡ Мәскәүгә йыйыныусы "күптәнге дуҫтар" Стив Уиткофф менән Джаред Кушнерға ла Кремлдең нимә тип яуап бирере мәғлүм. Рәсәйҙең өс яҡлы осрашыуға риза булмауы уның енеүгә ышаныс белдереү билдәһе түгелме, Джон әфәнде?

Шуныһы ла бәхәсһеҙ: сит ил дипломаттарының маҡсаты - Украина конфликтын көйләүҙә Кремлдән "сигенеүҙәргә" өлгәшергә маташыу ул, тип яҙҙы сәйәси күҙәтеүсе Дмитрий Дриз. Бындай хәлгә хатта Финляндия президенты Александр Стубб та битараф ҡала алманы, ул Европа илдәрен Рәсәй менән һөйләшеүҙәргә саҡырҙы.

Яңы аҙна башы берҙәмлек һәм үҫеш символына әүерелгән ШОС (Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы) йыйыны хаҡында мәғлүмәт менән асылды. Унда Рәсәй Президенты Ҡытай лидеры Си Цзиньпин, Һиндостан премьеры Нарендра Моди менән осрашып һөйләште. Унда шулай уҡ Украина конфликты хаҡында ла һүҙ булды. Һиндостан премьеры Украина буйынса бөтөн тыныслыҡ башланғыстарын хуплауын белдереп, "һуғыштың һәр көнө кешелекте артҡа ташлай", тине. Уға яуап һүҙендә Владимир Путин, Рәсәй тыныс көйләү юлынан бара, тип белдерҙе.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты, Башгидромет мәғлүмәттәренә һылтанма менән 1-7 сентябрҙә республиканың көньяҡ-көнсығыш райондарында ғәҙәттән тыш янғын хәүефе тураһында иҫкәртте. Бындай шарттарҙа һәр осҡон йәки ут менән һаҡһыҙ эш итеү бәләгә әүерелергә мөмкин. Шуға күрә түбәндәгеләр ҡәтғи тыйыла: урмандарҙа һәм эргә-тирәләге биләмәләрҙә усаҡ яғыу; ҡоро үлән, сүп-сар һәм төрлө материалдарҙы яндырыу; асыҡ ут менән файҙаланыу; һүндерелмәгән тәмәке төпсөктәрен, шырпы һәм башҡа янғын сығанаҡтарын ҡалдырып китеү.

✓ Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов мэриялағы оператив көнәшмәлә баш ҡаланың Яһалма ҡоролмалар ремонтлау буйынса махсуслаштырылған идаралығын Марат Юнысов етәкләүе тураһында белдерҙе. Марат Риф улы Башҡорт дәүләт аграр университетын "Ауыл хужалығын механизациялау" һөнәре буйынса тамамлаған. Бер нисә ойошмала һәм учреждениела инженер-механик, баш механик, административ-хужалыҡ бүлеге начальнигы булып эшләй. Һуңғы йылда Дим районын төҙөкләндереү хеҙмәтендә баш инженер вазифаһын биләй.

✓ Өфө йылытыу миҙгеленә 15 сентябрҙә әҙер булырға тейеш, тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенән. Әле гидропневматик йыуыу үткәреү һәм йорт эсендәге инженер селтәрҙәрен гидравлик һынау буйынса эштәр тамамланыу өҫтөндә. Гидравлик һынауҙар буйынса тағы 168 акт алырға ҡалған. Идарасы ойошмалар асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өҫтөндә эшләй.

✓ Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында етем балаларға торлаҡ һатып алыу өсөн 546 контракт төҙөлгән. Был хаҡта БР Төҙөлөш һәм архитектура министрлығынан хәбәр иттеләр. Шулай уҡ торлаҡ һатып алыуға 124 сертификат бирелгән. Планға ярашлы, быйыл ошо категорияға ҡараған 756 кешене тәьмин итергә кәрәк, бының өсөн бюджеттан 2,9 миллиард һум аҡса бүленгән. Әлеге көндә 7835 етем бала сиратта тора, уларҙың 5346-һына 18 йәш тулған һәм торлаҡ алыу хоҡуғына эйә булған.

✓ Өфөнөң үҙәк урамдарында йылылыҡ магистралдәрен капиталь ремонтлау буйынса эштәр тамамланыуға бара, тип хәбәр итәләр ҡала хакимиәтенән. Октябрҙең 50 йыллығы урамында ремонтсылар 217 метрҙан ашыу торба үткәргесен алмаштыра. Мостай Кәрим урамында ла эштәр дауам итә. Ә Киров урамындағы йылылыҡ магистрален ремонтлау тамамлана. Иҫке торбалар пенополиуретан изоляцияһы һәм һаҡлағыс полиэтилен тышсаһы булған замансаларына алмаштырыла. Улар оҙайлы файҙаланыу ваҡыты менән айырыла, шулай уҡ йылыны юғалтыуҙы һиҙелерлек кәметә.

“БАШИНФОРМ”
материалдары файҙаланылды.

✓ *Ул имеш-мимештәрҙең авторҙары үҙенең башында тыуған уйҙарҙы йәһәтләп халыҡ араһына таратыу һөҙөмтәһендә билдәлелек яулаған, абруй ҡаҙанғандыр, тигән фекер төйнәргә булалыр.*

РУХИӘТЕБЕҘ



БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ...

сер һәм мәғлүмәт сығанағы

Башҡорт алъяпҡыстары ла төрлөләргә менән айырылып тора. Әйткәндәй, башҡорт кейеме составында алъяпҡыстар бөтөн ерҙә лә осрамай, мәҫәлән, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында ул юҡ. Был төбәк халҡының XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем төп шөғөлө малсылыҡ булған. Тимәк, улар даими рәүештә күсмә тормош менән йәшәгән. Ә алъяпҡысты йорт эштәре менән булышҡанда таҡҡандар.

Камзулдарға килгәндә, был еңһеҙ кейемдең алғы өлөшө тура төшә, ә артҡы өлөшө арҡаға һылашып ҡына төшә лә, бил тирәһендә киңәйә, быныҡ өсөн махсус рәүештә ҡабырға йөйөн арҡаға сығарыбыраҡ тегәләр. Иң ҡыҙығы, ошондай бесең принцибы тарихи кейем өлгөләрендә, атап әйткәндә, XVII-XVIII быуаттарҙа Франция осраған жесто-корптарҙа осрай. Француз кафтаны камзул өсөн өлгө була аламы, юҡмы, был мәсьәлә асыҡ ҡала, әммә 1812 йылдағы һуғышта Парижғаса еткән ата-бабаларыбыҙ уларҙы трофей итеп алып ҡайтмаған тимә.

Халыҡ сәнғәтенең һәр өлгөһөндә лә бизәүҙәр киң ҡулланыла. Боронғо кешеләрҙең тормошонда биҙәктәр ҙур роль уйнаған, улар кешене яуыз көстәрҙән һәм күҙҙәрҙән һаҡлаған, ниндәйҙер йола үтәү өсөн кәрәк булған, хужаһының социаль статусын күрһәтеп торған. Биҙәктең һәр элементы һаҡлау ролен үтәгән. Хәҙерге заманда тәнде "яуыз көстәр"ҙән һаҡлау кәрәклеге юғалған, сөнки уларға ышаныу юҡҡа сыҡҡан. Шулай ҙа бөгөнгө көндә һаҡлау төшөнсәһе әһәмиәтен юғалтҡан тип тә әйтеп булмай, ул икенсерәк кимәлгә күскән. Бөгөн "энергетик вампир", кешене һаҡлап тороусы ҡатламдар, мәҫәлән, аура тигән терминдар ҡулланыла. Йәғни, элек кешенең йәне һаҡлауға мохтаж булһа, бөгөн тәндең энергетик ҡатламы һаҡлау объекты булып тора. Шуға ла кейемдең "һаҡлаусы" өлөштәре лә үҙгәрҙе, заманса костюмда насар кешеләрҙең энергетикаһынан аураны һаҡлау өсөн ювелир биҙәүестәренә, бетеүҙәргә, төҫтәргә күберәк иғтибар бирелә. Әммә боронғолар ҡурҡыныс янаусы әйберҙәргә күберәк мистик төҫ биргән, улар кеше күҙенә күренмәй һәм хатта кейем аша ла кешенең йәненә үтеп инә ала, тип иҫәпләгән. Кейемдең иң "йомшаҡ" ере тип йырыҡтар, тегелгән урын иҫәпләнгән. Шуға ла бындай урындарҙы биҙәгәндәр ҙә. Милли кейемдә яға, түш киҫелеше, итәктең һәм еңдең осо биҙәлгән. Башҡорт күлдәгендә бигерәк тә уның өҫкө өлөшөнә иғтибар биргәндәр. Ошо маҡсатта түш уйымы тәүҙә сигелгән түшелдерек менән ҡапланған. Һуңғараҡ түш уйымын сигеп биҙәгәндәр, ул иҙеү тип аталған. Хәҙерге фәндә милли костюмды философтар ҙа өйрәнә. Кейем һаҡлаусы ролен үтәүҙән тыш, матур биҙәктәр кешелә тик ыңғай тойғолар ғына уятҡан. Матурлыҡты күрә белгән кеше иһә, яуызлыҡ ҡылмаясаҡ. Шуға ла биҙәктәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте лә юҡ түгел.

Айгөл КАМАЛИЕВА.
"Башҡорт костюмы" китабынан.
(Дауамы бар).

УЙЛЫҒА - УЙ

БЕЛГӘНЕҢДЕ ҺӨЙЛӘМӘ...

ни һөйләгәнеңде бел!



Был интернет тигәндәре бик әкәмәт нәмәкәй икән. Юҡ, бик әкәмәт тә түгел, ҡурҡыныс та шикелле. Әллә ҡурҡыныс булыуы менән бергә бик кәрәкле лә инде?

Интернет селтәрендәге иләп-һуғылмаған "яңылыҡтарға" бер барып бәрлекһәң, һөҙөп кенә алып, үҙенә һеңдерерлектәрен һайлап алыу өсөн яңы технологиялар өлкәһендә лә, медицина, педагогика, сәйәсәт өлкәләрендә лә бер аҙ белемгә эйә булырға, шул уҡ ваҡытта көслө психолог та булырға тейешһең кеүек тойола әле үҙемә. Ошо урында: "Күптәребеҙ интернетҡа алданып, яҙма баҫмаларға иғтибарҙы бөтөнләй юғалттыҡ бит, хөрмәтле милләттәштәр!" - тип һөрән налғы ла килә. Әлбиттә, интернеттың файҙаһын инҡар итеп булмай, әммә минең әйтергә теләгәнем: интернет селтәрҙәрендә дәлилһеҙ бирелгән мәғлүмәт һаҙлығына батмай, яманды - яҡшынан, дөрөҫлөктө ялғандан айыра алырлыҡ белемебеҙ, көсөбөҙ булып, сама белерлекбеҙме һуң? Бына ошондай һорауҙар борсой әле үҙемде.

"Дәлилһеҙ" тиеүемдең әтнәкәһе лә шунан: интернет селтәрҙәрендә яҙылған "Теге әртис был әртис менән йәшерен ғишыҡ тоталар, ти", йә булмаһа, теге хужаның аяғына 55 меңлек туфли кейеп алыуы йәки был хужаның ҡатынының 98 меңлек күлдәге барлығы тураһындағы "яңылыҡтар" менән бүлешергә һәм үҙенә абруй ҡаҙанырға маташыусы ҡайһы берәүҙәрҙе йәлләп, "Бисараҡай, айыҡ фекер тупларға һиңә нимә ҡамасаулай?" тигән һорауға яуап алғы килә. Шуныһы ғәжәп: ошондай имеш-мимештәргә ышаныусылар табыла, юҡты бар итеп, үҙенән өҫтәп, артабан был "яңылыҡтарҙы" үҙ кимәленән сығып таратыусылар ҙа табылып ҡына тора бит әле. Шулай итеп, диңгеҙҙе ел сайҡалтһа, бик күптәр һуҙ менән "сайҡалып", былай ҙа тыныслыҡланып торған донъяны болғарға маташа, ғәҙеллекте өҫтөн ҡуйыу урынына әшәке яҙмалар менән туйынып көн күрә, гонаһҡа бата. Ул имеш-мимештәрҙең авторҙары үҙенең башында тыуған уйҙарҙы йәһәтләп халыҡ араһына таратыу һөҙөмтәһендә билдәлелек яулаған, абруй ҡаҙанғандыр, тигән фекер төйнәргә булалыр. Шуныһы ғәжәп: ошондай "яңылыҡтарҙы" таратыусылар араһында тормош тәжрибәһе туплағандар ҙа бар бит.

...Кайһы бер таныштарымдың төндә йоҡлай алмай, төрлө уйҙарға сумып таң аттырыуы тураһында зарланып һөйләгәндәрен ишеткәнем бар. Үҙемдең дә бындай хәлдәрҙән азат булалмай үткәргән төндәрем булманы түгел, булды. Уй бер килеп индеме, башыңа һин хужа түгел, ә уйҙар һинең башыңа хужа булып, барлыҡ тыныслығыңды, тимәк, һаулығыңды ала, тигән фекер төйнәгәйнем үҙем. Бәхеткә күрә, уйҙарҙы сикләү юлын үҙ-үҙемә "Аллаһы Тәғәлә миңә нимә әйтергә теләй икән?" тигән һорауҙы ҡуйырға өйрәнгәс кенә таптым булыр. Үҙем үҫкән ғаиләлә дингә ихтирам көслө булғанлыҡтандыр, табындарҙа ололарҙың "Балаларыбыҙға айыҡ аҡыл, үткер фекер, йомшаҡ фиғел бир, Аллаһым!" тип доға ҡылыуҙарын иғтибар менән тыңлаһам да, мәғәнәһенә бигүк төшөнмәй ҙә инем. Бөгөнгө интернет заманында һәр төрлө имеш-мимештәр менән тулған "яңылыҡтарҙан" ҡайһыныһы дөрөҫ, ҡайһыныһы ялған икәнен айырып ҡына, һөҙөп кенә алып һеңдереү өсөн кәрәк булған икән атай-олатайҙар беҙгә теләгән үткер фекер менән айыҡ аҡыл.

Ғалимдар әйтеүенсә, уй - ул туҡтай белмәй торған ағым. Фекер, киреһенсә, аныҡ ҡарар сығарыуҙы талап итә, шуға күрә эҙләнергә, ижад итергә этәрә. Интернетта бирелгән һәр хәбәрҙе ысынбарлыҡ икән тип ҡабул итеү, уға ышанып, донъя буйлап таратыуҙа ҡатнашыу - оло гонаһ. Халҡыбыҙҙың "Белгәненде һөйләмә, ни һөйләгәненде бел!" тигән аҫыл һүҙҙәрен хәтерҙә тотоусы мөьмин-мосолман юғарыла бәйән ителгән әшәкелектәргә юл ҡуйыуҙа ҡатнашмай, оло гонаһтарҙан алыҫ тора, минеңсә. Фекерләй белеүҙең дә дөрөҫ, йәғни ыңғай юҫыҡта йәки тиҫкәре юҫыҡта фекер йөрөтөү кеүек йүнәлештәре барҙыр, күрәһең. Әммә шуныһы билдәле: кеше фекерләй белеп тыумай, бәләкәй саҡтан уйлай белһә лә фекер йөрөтөргә, нығырға яһарға йәшәй-йәшәй өйрәнә. Образлы итеп әйткәндә, тормош - дәрес, Аллаһ Тәғәләне дөрөҫ йәшәү өсөн һабаҡ биреүсе итеп күрә, аңлай белһәк, хаталар ебәреүҙән азат булмаған хәлдә лә дөрөҫ фекерләргә юл күрһәтеүсе яйы табыла, ин шәә Аллаһ. Илебеҙгә ҡурҡыныс янағанда, шулай уҡ ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл иткәндә, атай-олатайҙарыбыҙҙың аҡыллы кәңәштәре, урынлы әйтелгән нигеҙле, төплө фекерҙәре менән бүлешеп, сабырһыҙҙарға сабырлыҡ, хислеләргә айыҡ аҡыл менән эш итеү юлдарын өйрәтеп, йорт-илебеҙҙе һәр төрлө афәттәрҙән ҡурсалап ҡала алыуҙары мәғлүм.

...Аллаһ Тәғәлә бер ваҡыт фәрештәләрен саҡырып алып: "Мин кешеләрҙең күҙҙәренә күренмәй (!) генә улар менән идара итергә йыйынам. Әммә минең ҡәтғи шартым буйынса, Әҙәм балалары Минең барлығымды тойорға, ярҙамдарыма рәхмәтле була белергә, әгәр ҙә инде гонаһ ҡылһалар, Минән яза булырын һиҙергә тейеш. Уларҙың күҙенә күренмәй генә нисек итеп идара итергә булыр икән? Ҡайһыныгыҙ миңә бик һәйбәт кәңәш бирә алыр?" - тигән һорау менән мөрәжәғәт иткән, ти. Тәүге фәрештә күктәргә ашып, күк йөҙөнән тороп идара итергә кәрәклеген әйткән, ти. Аллаһ Тәғәлә был кәңәште ҡабул итмәй: "Кешеләр күккә менәсәк һәм унда Мине күрәсәк!"- тигән. Икенсе фәрештә диңгеҙ төбөнә төшөп идара итеүгә бер ни ҙә етмәйәсәген аңлатҡас, Аллаһ Тәғәлә кешеләрҙең диңгеҙ төбөнә лә төшәсәге тураһында әйткән. Өсөнсө фәрештәнен: "Бәлки, кешеләрҙең йөрәгенә урынлашырһың? Минеңсә, кешеләрҙең йөрәгенә йәшеренһәң, Әҙәм балалары, һине күрмәй, гел сит-ҡырҙан эҙләйәсәк. Улар үҙ йөрәгенә мөрәжәғәт итмәй, тимәк, Һиңә мохтажлығын аңламай, ярҙамды ситтән көтөп, үҙ уңышһыҙлыҡтарында Һине ғәйепләйәсәк, ә үҙенең йөрәгендә урынлашҡан Һиңә иғтибар ҙа бирмәйәсәк. Шулай ҙа бик һирәктәр, Һине йыш иҫкә алыусылар ғына, Һинең барлығыңды белеп, эстән генә Һинең менән кәңәшләшәсәк, ярҙам нораясаҡ!" - тигән яуабы Аллаһ Тәғәләгә бик оҡшап, һәр кемдең йөрәгенә инеп урынлашҡан, ти. Йөрәгендә урынлашҡан Аллаһҡа мөрәжәғәт итмәйенсә, бары тик хис-тойғолар аша дуҫ-дошмандарҙың һүҙе менән йәшәүҙе тормош девизына әүерелдерһәң, йөрәгең ҡатып, һиҙгерлеген юғалтһа, кеше булып йәшәүҙең ни мәғәнәһе булыр икән, хөрмәтле милләттәштәр? Күңелдә яралған ярһыу хистәрҙең ҡыҙыулыҡҡа йә төшөнкөлөккә, аҡылһыҙлыҡҡа этәреүенә юл ҡуймай, айыҡ аҡыл менән эш итергә өйрәтә ләбаһа халҡыбыҙ хазинаһы булған был риүәйәт!

Хәҙерге буталсыҡ, балаларыбыҙға дөрөҫ тәрбиә биреүе лә ауырлашҡан заманда ошондай риүәйәттәребеҙ күберәк яңғыраһын ине, хөрмәтле гәзит уҡыусылар! Һуҙ ыңғайында "Киске Өфө" гәзитенең был өлкәләге эшен өлгө итеп үтмәһәм, яҙыҡ булыр. Гәзиттең иң һуңғы битендәге "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһының халҡыбыҙ өсөн роле баһалап бөткөһөҙ, минеңсә.

Хистәребеҙ тәүге күреүҙән йәки беренсе тапҡыр ишетеүҙән барлыҡҡа килеп, алдаҡсы хистәр булып ҡуйыу ихтималлығы ла бар бит. Хистәр менән генә йәшәп, аҡылыбыҙҙы һанламаһаҡ, уны эшкә екмәһәк, үҙебеҙҙе лә, яҡындарыбыҙҙы ла билдәһеҙлек аҫтына ҡуйыу ҡурҡынысы була түгелме? Фекер йөрөтә белеү - башыбыҙҙа тыуған яркыулыҡҡа йәки артыҡ шатланыу-ҡайғырыуҙарға юл ҡуймау өсөн үҙ хистәреңде ауыҙлыҡлай алыу ул. Фекереңде уятыу өсөн үҙтәнҡитеү булып, үҙ-үҙеңде үҫтереү өҫтөндә эшләргә кәрәк, минеңсә.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтмәксемен: сабый бала булһынмы ул, йәш-елкенсәк булһынмы, уйлай белһә лә, әлегә төплө фекер йөрөтөү тәжрибәһе юҡ. Бала фекерле булып тыумай, фекерле булып йәшәргә өйрәнә! Шунлыҡтан, сабый газ плитаһын асыҡ ҡалдырып китмәһен тип тә борсолабыҙ, яр буйына барһа, һыуға төшөп китмәһен тип тә ҡарауыллайбыҙ, ә йәш-елкенсәкте тормош юлында ауырлыҡтар алдында юғалып ҡалмаһын, яманды яҡшынан, ялғанды дөрөҫлөктән, дуҫты дошмандан айыра белһен тип борсолабыҙ. Халҡыбыҙҙың бик фәһемле "Белгәненде һөйләмә, ни һөйләгәненде бел!" тигән һүҙҙәрен хәтеребеҙҙән сығармай, кеше булып ҡалырға өйрәтәйек йәш буынды ла.

Назия БИКБОВА,
Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны.
Өфө ҡалаһы.

✓ *Салауат Ғәлләмовтың тарихи яҙмаларына шул уҡ тарихсыларыбыҙ тәүҙә ҡырҡа рәүештә кире баһа бирҙе лә, күпмелер ваҡыт үткәндән һуң, ғалимдың асҡан мәғлүмәттәрен үҙ китаптарында ҡуллана ла башланы.*

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

Арабыҙҙа милләтебеҙ тарихы менән ҡыҙыҡһынмаған инсандар һирәктер. Был ҡыҙыҡһыныу, XX быуат аҙаҡтарында яңынан ҡабынып киткән милли-сәйәси хәрәкәттең бер сағылышы булып, һуңғы йылдарҙа айырыуса көсәйеп китте. Тарих, бары тик билдәле бер фәнни концепциялар нигеҙендә һәм ғилми тикшеренеү сиктәрендә генә фекерләүҙе мотлаҡ принцип тип иҫәпләгән тарихсы-ғалимдар даирәһенән сыға биреп, башҡа ғилем эйәләренең дә, айырым үҙешмәкәр тикшеренеүселәрҙең дә иғтибарын яулап алды. Әлбиттә, бындай ҡыҙыҡһыныу үҙенә күрә бер ижтимағи феноменға әйләнә башлауына ҡарамаҫтан, профессиональ тарихсыларыбыҙ үҙаллы тикшеренеүҙәрҙе һис тә хупламай, һәм улар, бер ҙә уйланып йә икеләнеп тормайынса, үҙҙәренең "епархияһына" рөхсәтһеҙ инеүселәргә "дилетант" мөһөрөн баҫырға әҙер генә тора.

МИН ЯҘҒАНДЫ, ӘКИӘТ, ТИМӘ...

әкиәт төбөндә лә хәҡиҡәт бар



Тарихтың туҙға ғына түгел, телгә лә яҙылғаны

Бына бән фәкирегеҙ шәхси психолингвистик тикшеренеүҙәр нигеҙендә башҡорт халҡының килеп сығышы проблемаһы буйынса үҙ ҡараштарын гәзит-журнал биттәрендә йәмәғәтселек иғтибарына тәҡдим иткәйне. Ошо мәғлүмәт менән танышҡас, билдәле зыялыларыбыҙҙың береһе миңә: "Һинең яҙмаларың тарих фәне принциптарына тура килмәй, бындай "әкиәттәрҙән" әллә ниндәй һығымта эшләп булмай", тип, үҙенең кире ҡарашын белдерә ҡуйҙы. Мин уның был һүҙҙәренә аптырамайым да, үпкәләргә лә йыйынмайым. Тик бына нимә иҫкә төшә: Салауат Ғәлләмовтың ҡыйыу һәм нигеҙле тарихи яҙмаларына шул уҡ тарихсыларыбыҙ тәүҙә ҡырҡа рәүештә кире баһа бирҙе лә, күпмелер ваҡыт үткәндән һуң, остракизмға дусар ителгән ғалимдың "Урал батыр" эпосын "Гилгәмеш тураһында хикәйәт" һәм һиндиранлыларҙың башҡа боронго эпостары менән сағыштырмаса өйрәнеп асҡан мәғлүмәттәрен үҙ китаптарында бер ни ҙә булмағандай ҡуллана ла башланы.

Бер тарихсы остазыбыҙ фекеренсә, мәҫәлән, "башҡорт" этнонимын тикшереп, уның килеп сығышын, тарихи этимологияһын анализлап, ысынбарлыҡҡа тура килгән тәү мәғәнәһен асыҡлауҙан бер ниндәй ҙә фәтеүә юҡ. Йәнәһе, бөтә донъя тарихсыларының уртаҡ фекеренә ярашлы, этнонимдар осраҡлы рәүештә нығынып ҡалған атамалар, тип иҫәпләнгәс, уларҙы халыҡтарҙың килеп сығышы менән бәйләү хата фекер. Оппонентым ошо ҡарашты дәлилләү сифатында "үзбәк" этнонимын миҫал итеп алды: Үзбәк хандың исеме уның ҡулы ҫалтындағы ҡәүем атамаһы булып китеүенән әллә ниндәй мәғәнә эҙләп тороуҙың бер кәрәге лә юҡ. "Башҡорт" атамаһын Башҡорт хан исеме менән бәйләүе булдымы икән, әллә башҡа бер сәбәптәнме - уныһы миңә билдәһеҙ. Әйткәндәй, XII быуатта Ҡара диңгеҙ буйҙарында хакимлыҡ иткән Башҡорт хандың үҙенең исеме башҡорт сығышлы булыуы менән бәйле икәненә һис бер шик юҡтыр. Башҡорт хандың урта быуаттарҙа Көнсығыш һәм Европа сығанаҡтарында телгә алынған "Тышҡы башҡорт" иленең һуңғы хакимы булыуы бик мөмкин. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең тарихсы-ғалимдарыбыҙ ошо фактты белергә лә, ғилми яҡтан ентекләп тикшерергә лә ашҡынып бармай әле.

Гөмүмән, ҡайһы бер тарихсыларыбыҙҙың, үҙҙәре табынған принциптарға сат йәбешеп ятып, ниндәйҙер яңылыҡ асырҙай тикшеренеү алымдарына ҡырын ҡарауы фәнгә лә, йәмғиәткә лә файҙалы түгел. Бына, мәҫәлән, боронго инглиздәр ерҙең уңдырышлығын күтәреү өсөн ҡулланған арбауҙарында ошолай тип әйткән икән:

"Эрке, Эрке, Эрке,
ер әсәбеҙ һин,
бөтәһен биреүсе,
мәңгелек хаким
бүләк итһен һиңә
бай биләмәләр,
сәскә атҡан болондар,
күп тыуҙырыусы,
күп балалы,
мул уңышлы баҫыуҙар..."

Боронго гот ҡәүемдәре Ер илаһын шулай уҡ Эрке тип атаған. Эрке, йәиһә Эрке илаһының башҡортса варианты Еркәй булып, тора-бара Йәркәй тигән антропонимға нигеҙ булып китеүен тоҫмалларға була. Тик шул ваҡытта кемдер берәү ошо тура килешлекте осраҡлы күренеш һәм бынан ниндәй ҙә булһа һығымта яһау урынһыҙ, тип әйтер. Ҡасандыр бер боронго тарих боролмаларында башҡорт, инглиз һәм готтарҙың ата-бабалары яҡындан аралашып, бер рәүешле көн итеп, бер үк илаһтарға табынып йәшәү мөмкинлеге уларҙы ҡыҙыҡһындырмай бит.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.

(Дауамы бар).

АРҘАҠЛЫЛАР ӘЙТКӘНЕ

ЙӘМҒИӘТ ТӘРТИПТӘРЕ

Мөхәмәтсәлим ӨМӨТБАЕВ



Тәҡдимдәр

7. Ҡырыҫ климатлы был крайҙа йылдың дүрт айын ғына файҙалы эш менән үткәрәләр. Ә ҡалған һигеҙен башҡорт нисек етте шулай йәшәй. Рус мужигы ғүмерен эшһеҙ үткәрмәһен өсөн земстволар һөнәрселек училищелары һәм файҙалы эш йорттары ойошторалар. Бындай саралар башҡорттарҙың тормош-көнкүрешен яҡшыртыу өсөн дә бик кәрәкле. Айырыуса һуғыу, тегеү, столярлыҡ йорттары төҙөү маҡсатҡа ярашлы. Тик уларға уҡытыусылар һәм надзирателдәр итеп миссионерҙарҙы ҡуймау хәйерлерәк, сөнки улай иткәндә хөкүмәттең һәр бер эшенә, хатта ул үтә файҙалы булһа ла, халыҡ ышанып бармай, ҡаршылыҡ күрһәтә.

8. Баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеүҙе, башҡорттар ғәскәри булған заманда уҡ индерелгәнсә, мотлаҡ мәжбүри итергә кәрәк. Сәбәпһеҙ баҡса үҫтермәүселәрҙе һәм иген икмәүселәрҙе яза рәүешендә юл йүнәтеү, күпер төҙөү, ер межалаусы бағаналар әҙерләп ултыртыу һәм шуның ише башҡа йәмғиәткә файҙалы эштәргә ҡушырға. Быны баҡсасылыҡҡа тотошлай күсәнгәсә ҡулланырға. Ниәтләнгән эш-саралар хаҡында алдан губерна "Ведомостар"ында баҫтырып сығарғанда, волость һәм ауыл сходтарында иғлан иткәндә, файҙалы булыр ине. Юғиһә, ғәскәри идараһы ҡаршында ҡатмарлы бюрократик процедура үтергә тура килер ине.

9. Крепостной ҡоллоҡтан азат иткәнсе (1861) алпауыт ҡулында булған крәҫтиәндәр кеүек үк, башҡорттар ҙа гражданлыҡ ведомствоһына күскәнгә (1863) саҡлы аҡсалата пособие һорай белмәйҙәр ине. 1867 йылғы аслыҡ сығыу арҡаһында улар башҡа крәҫтиәндәр менән бергә беренсе тапҡыр орлоҡ һатып алыу өсөн аҡсалата пособие алдылар, ә ас-яланғастарға ул үҙ ғаиләләрен туйҙырыу өсөн бирелгәйне. Ләкин алынған сумма әле булһа түләнеп бөтөлмәгән: бирәсәктәрҙе ҡайтарыу ваҡытын кисектереү хаҡында әленән-әле килешеүҙәр төҙөлә, улай ғына ла түгел, ссудалар һорап, яңы ғаризалар яҙыла. Крәҫтиәндәр һәр саҡ ҡаҙна аҡсаһына өмөт итмәһендәр өсөн бөтә урында ла йәмғиәт һөрөнтө ерҙәре булдырырға кәрәк. Улар ҡытлыҡ йылдарҙа крәҫтиәндәрҙе иген менән дә, аҡса менән дә күтәрер ине. Был ерҙәрҙә игендән башҡа емеш-йәшелсә үҫтерергә кәрәк һәм эшкә яраҡлы һәр кеше унда бер нисә көн эшләргә тейешле. Йәмғиәт һөрөнтө ерҙәренән алынған дөйөм килем ҡоролоҡло йылдарҙа йән башына бүлеп бирелер ине.

(Аҙағы. Башы 31-34-се һандарҙа).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР

Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

XIX быуат һуңында башҡорттар араһында *кейеҙ эшләпәләр* киң таралыу ала. Улар ике төрлө була: ярымшар формаһында, тығыҙ итеп баҫылған, ситтәре артыҡ ҙур түгел, улар өҫкә бөкләп ҡуйыла **(һүрәт)** һәм конус формаһында, төбө тәрән түгел һәм ситтәре лә артыҡ ҙур түгел, улар өҫкә күтәрелмәй, бик йыш төшөрөлөп ҡуйыла. Икенсе формаһы - йомшаҡ һәм артыҡ тығыҙ баҫылмай. Кейеҙ эшләпәләрҙең урындағы төрҙәре тип уларҙың яҫылығын, киҫешендә дуға һымаҡ булғандарын, ситтәре киң булып һәленеп торғандарын һәм ситтәренең алдан һәм арттан ҡыҫҡартылғандарын атарға мөмкин. Бындай эшләпәләрҙе, нигеҙҙә, ҡарттар һәм үҙәк, өлөшләтә көнбайыш Башҡортостанда диндарҙар кейгән. Ҡайһы бер урындарҙа башҡорттар бөтөнләй эшләпә кеймәгән.



Ирҙәр баш кейеме араһында *ҡолаҡсын* айырым ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра **(һүрәт)**. Рустарҙа ул малахай атамаһы аҫтында билдәле. Улар тураһында В. М. Черемшанский, улар сәйер формала, ҡанаттары һәм елкәне ҡаплап тоған ҡойроҡтары бар, тип яҙа. Һүрәттән күренеүенсә, ҡолаҡсын - түбәһе осло булған, алғы өлөшөндә маңлайҙы ҡаплаған козырегы булған, биттең ян-яғын ҡаплап торған оҙон ҡолаҡлы һәм эйәк аҫтында бәйләп ҡуйылған һәм арттан елкәне һәм муйынды ҡаплап торған баш кейеме. Ҡолаҡсын һарыҡ йәки төлкө тиреһенән тегелгән һәм өҫтөнән туҡыма менән тышланған. Тышланмаған ҡолаҡсындар бик һирәк осраған. Ҡайһы бер ваҡытта, бигерәк тә *төлкө ҡолаҡсындың*, өҫкө өлөшө кейеҙҙән тегелгән һәм шул арҡала үҙенең бейек, пирамидаль формаһын һаҡлаған, уның тирә-яғына тире тегелгән, ҡыҙыл йәки ҡара буҫтау менән тышланған; бынан тыш, байҙар уны уҡа менән ҡайыған. Ҡолаҡсын бигерәк тә дала бурандарында бик йылы һәм уңайлы булған. Ул бик борондан яланда күсмә тормош алып барған малсыларҙың баш кейеме булараҡ билдәле.



ХХ быуат башында ҡолаҡсын бик һирәк булһа ла Көньяҡ Уралда, Урал аръяғында, көньяҡта һәм көньяҡ-көнбайышта осраштырғылай.

Шундай уҡ баш кейеме, әммә йәйгеһен кейә торғаны *көләпәрә* тип атала. Ул өйҙә туҡылған аҡ буҫтауҙан тегелә, эс ҡуйылмай, уҡа урынына ҡыҙыл буҫтау йәки икенсе туҡыма менән ситләтелә. Көләпәрәнең таралыу районы ҡолаҡсынға ҡарағанда тарыраҡ һәм ул бары тик Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш мөйөшөндә генә осрай.

Башҡорттар һәр ерҙә *иләсә* һәм аҡ һарыҡ йөнөнән бәйләнгән *бирсәткәләр* кейә. Сағыштырмаса һирәк тиренән тегелгән һәм буҫтау менән тышланған *бейәләйҙәр* осрай; шулай уҡ *күн бирсәткәләр* ҙә күренә. Күн бейәләйҙәр ҡайһы берҙә тышланған туҡыма өҫтөнән ҡайыла, ситтәре тире, бик йыш ҡиммәтле йәнлек тиреһе (ҡондоҙ) менән ситләнә.

(Дауамы бар).

”ГҮЗӘЛ-ДЭНС”

фәкәт аяғүрә



"Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Гүзәл-Дэнс" бейеү ансамбленың отчет концерты бара. Залда ла, балконда ла тамашасыларҙың яртыһынан күберәге, урын булмағанлыҡтан, уны аяғүрә баҫып ҡарай. Был да осраҡлы түгел - фәкәт аяғүрә баҫып ҡарарлыҡ тамаша. Башҡа концерттарҙан айырмалы рәүештә, сәхнәлә, ҡанаттарын йәйеп, Йыһанға күтәрелеүсе балалар, үҫмер йәштәге, йәш сәнғәт оҫталары - барыһы ла тиерлек баш ҡалабыҙ Өфөлә тыуып үҫеүсе быуын вәкилдәре. Ҡасан ғына әле был хәл беҙҙең төшөбөҙгә лә инеп сыҡҡаны юҡ ине бит!
Ансамблдең эшмәкәрлеге хаҡында "Гүзәл-Дэнс" бейеү ансамбле етәксеһе Гүзәл Рәшит ҡыҙы ИСЛАМҒОЛОВА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.

Гүзәл Рәшит ҡыҙы, тәүге тапҡыр сәхнәлә бейегән бала сағыңды иҫкә төшөрәйек әле. Ҡасан, ниндәй сәхнәләрҙә сығыш яһаның, ниндәй бейеүҙәр булды репертуарыңда?

- Иң тәүҙә Салауат ҡалаһында Нефтехимиктар мәҙәниәт йорто янындағы балет студияһында шөғөлләнә башланым. Икенсе класта уҡыған бында атайым мине алып килгәйне. Уҡытыусым Наталья Геннадьевна Любимова булды. Ул Воронеждағы хореография училищеһын тамамлап, яңы ғына эшкә килгәйне. Бик көслө, талантлы бейеүселәрҙән торған коллектив тупланы ул. Тәүге бейеүем "Ҡулсатыр (зонтик) менән бейеү" тип аталды. Ул саҡта "солистка" тигән һүҙҙең дә нимә аңлатҡанын белмәй инем әле.

Алып килгәстәре, бейейем инде, тиеберәк йөрөнөм башта, йәғни, спорт ҡыҙыҡһыныуы булды. Ә бейеүгә аңлы һәм ижади ҡарашым бишенсе класта уҡыған барлыҡҡа килде. Тап шул саҡта балетҡа арналған журналға яҙылғаным хәтерҙә.

Ә башҡорт бейеүенә ҡарата ҡыҙыҡһыныуың ҡасан барлыҡҡа килде?

- Педагогыбыҙ Салауаттан киткәс, мин шул уҡ ҡалалағы "Ағиҙел" коллективына йөрөй башланым. Унда мин төрлө халыҡтар бейеүҙәре менән таныштым. Урта мәктәптән һуң Стәрлетамаҡ мәҙәниәт-ағартыу техникумына уҡырға индем. Тап шунда инде ысын мәғәнәһендәге башҡорт бейеүен танып белдем. Техникумды тамамлағандан һуң, 1988 йылда, мине Рәвис Харисов Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбленә саҡырҙы. Майя Афзал ҡыҙы Таһирова педагогым булды. Ул - золом ҡорбаны, башҡорт яҙыусыһы Афзал Таһировтың ҡыҙы. Икенсе педагогым атаҡлы ҡурайсы Ғиниәт Ушановтың улы Юлай Ғиниәт улы Ушанов булды. Ул минең мәҙәниәт-ағартыу техникумында уҡытҡан уҡытыусым Светлана Ушановаңың туғаны булып сыҡты. Шулай итеп, миңә ошондай данлыҡлы уҡытыусыларҙан һабаҡ алыу, аралашыу бәхете тейҙе.

1992 йылда Башҡортостан мәҙәниәт министры Салауат Әминев Мәскәүҙәге ГИТИС-та опера театрынан, хореография училищеһынан, беҙҙең ансамблдән йәштәрҙе йәлеп итеп, курс ойоштороҙо. Мин дә үҙ бәхетемде һынап ҡараным һәм ул курсҡа ҡабул ителдем. Курста уҡығанда беҙ концерттарға, спектаклдәргә күп йөрөнөк.

Бер мәл концерт ҡарап, автобус менән ҡайтып килгәндә салондағы телевизор экранында испан бейеүен күреп ҡалдым. Хайран ҡалдым һәм үҙемдең дә шундай бейеүҙе башҡарыу хыялым барлыҡҡа килде. Ижади эҙләнеүҙәр юлында яҙмыш мине бер клуб менән таныштырҙы. Клубты Өфөгә оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә саҡырғайнылар. Артабан шул клубҡа эйәреп, Мәскәүгә, Испанияға оҫталыҡ дәрестәренә барҙым.

Моғайын, испандарҙың "Фламенко" бейеүенә ҡыҙыҡҡанһыңдыр, шулаймы?

- Шулайҙыр. Әммә ысын мәғәнәһендәге "Фламенко"ны башҡарыр өсөн кәмендә испанка булып тыуырға кәрәктер. Сағыштырыу өсөн: башҡорт бейеүен бар нескәлектәре менән башҡарыр өсөн дә башҡорт булып тыуыуың мотлаҡ. Башҡорт бейеүе тәү ҡарашҡа ябай ғына, һәр кем башҡарырлыҡ булып тойолһа ла, бейеүҙә милли рухты сағылдырыуҙың механизмдары бик ҡатмарлы.

Шулай итеп, мин "Фламенко"ны ентекле өйрәнеү менән шөғөлләнгәндә тормош иптәшем Роберт Юлдашев үҙенең "Курайсы" тигән төркөмөн ойоштора башланы. Ошо маҡсатта ул талантлы музыканттарҙы, барабансыларҙы, гитарала уйнаусыларҙы эҙләне. Уға был йәһәттән мин дә коллектив тупларға ярҙам иттем.

Тап шул саҡта "Березка" бейеү коллективы сығыштары иғтибарымды йәлеп итте. Был рус бейеүен башҡарыусылар бер ниндәй ҙә хәрәкәттәр яһамай, уларҙың хатта аяҡтары ла күренмәй, йөҙөп кенә йөрөгән кеүектәр. Шул саҡта "Ниңә беҙҙә үҙаллы жанрҙарҙы тәшкил иткән башҡорт бейеүҙәре юҡ?" тип уйланым. Беҙҙә бейеү коллективтары, ансамблдәр башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың бейеүҙәрен башҡара, ә ниңә үҙебеҙҙең бейеүҙәрҙе үҫтереү, яңы йүнәлештәр, жанрҙар барлыҡҡа килтермәйбеҙ? Элегерәк ауылдарҙа оҙон көй башҡарыу, ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнау буйынса йолалар, традициялар һаҡлана ине, был йәһәттән бейеү сәнғәте йылдам үҫеш кисерҙе, тип әйтә алмайбыҙ. Төрлө халыҡтарҙың бейеүҙәрен башҡарыу кәрәк, әлбиттә, әммә уны башҡорт бейеүен үҫтереү өлгөһө тип әйтә алмайбыҙ. Һуңғы ваҡытта барлыҡҡа килгән һәм ҙур популярлыҡ яулаған "Байыҡ" телевизион конкурсы был йүнәлештәге тәүге аҙымдарҙы тәшкил итте.

Бейеү кешене дисциплинаға өйрәтә, тиҙәр. Был дөрөҫмө, нимә генә тимә, ритмға тап килтереп баҫып өйрәнгән кеше тормош ритмына ла ҡулайлашалыр, шулаймы?

- Спорт та, бейеү ҙә кешене дисциплинаға өйрәтә. Беҙҙең "Маһисәрүәр" тигән бейеүебеҙ бар. Унда уң аяҡты шылдырып, уң яҡҡа хәрәкәт иткәндә бейеүсе алдында һәм артында килгән ҡыҙҙарҙың хәрәкәтен, үҙенең тын алышын контролдә тоторға тейеш. Әгәр шулай итмәһә, бер генә яңылыш баҫылған аяҡ бар бейеүҙе боҙоуы бар. Быныңөсөн бейеүсе "Уңға, уңға, уңға" тигән ритмик һүрәтте ҡағыҙә итеп алырға бурыслы.

Бейеүсе репетицияға һуңларға тейеш түгел, ул ваҡытында килеп, барыһы менән бергә разминка эшләргә бурыслы. Әгәр ҙә күнегеү үтмәһәң, артабан ни булыры билдәһеҙ. Гөмүмән, бейеү һәр йәһәттән кешене дисциплинаға өйрәтә.

Хәҙер бейеү коллективтары, ансамблдәре бихисап. Уларҙың барыһынан айырмалы рәүештә, һеҙҙең үҙ стилегеҙ барлыҡҡа килгән. Минеңсә, һинең иң тәүҙә балет мәктәбендә, аҙаҡ мәҙәниәт-ағартыу техникумында уҡыуың, испан, ирланд бейеүҙәрен өйрәнеүең, артабан Роберт Юлдашев ҡурайының космик аһәңе - ошолар барыһы бергә ҡушылып, үҙенсәлекле синтезды барлыҡҡа килтергәндер. Шулай түгелме? Һеҙҙең ҡыҙҙар ерҙә, сәхнәлә бейеп кенә йөрөмәйҙәр, һауала, Йыһанда осоп йөрөгән ишеләр бит. Мин тәүҙә Роберттың музыкаһы ғына быға булышлыҡ итәлер тип уйлағайным, баҡтиһаң, киңерәк икән...

- Беренсенән, дөрөҫ, музыка төп урынды биләй, музыка булмаһа, бейеү ҙә юҡ. Минең коллектив төҙөргә уй-ниәтем дә юҡ ине башта. Тәүге концертыбыҙҙы беҙ Стәрлетамаҡ бейеү театры базаһында ҡуйҙыҡ. Ул "Ҡурайсы" төркөмөнөң дә тәүге концерты ине. Роберттың бейеү көйҙәре илаһи. Унда "Ете ҡыҙ", "Хан ҡыҙы" бейеүҙәрен сәхнәләштерҙем. Концерттан һуң Роберт үҙенең төркөмөндә бейеүсе ҡыҙҙарҙы ла күргә теләне.

Беҙҙең бейеүҙәрҙең уңышы, минеңсә, тағы ла халыҡсанлыҡ менән академизмдың синтезына ла бәйле. Күрәһең, минең балет мәктәбендә шөғөлләнеүем быға булышлыҡ иткәндер. Бейеүселәрем дә халҡымдың иң матур, оҙон һәм һомғол буйлы ҡыҙҙары булырға тейеш. Дүртенсенән, бейеүҙең ҡуйылышы ла мөһим.

Әгәр ҙә ошо дүрт шарттың береһе генә булмаһы ла, бейеү килеп сыҡмаясаҡ, килеп сыҡҡан хәлдә лә, һөҙөмтәһе беҙ теләгәнсә булмаясаҡ. Игорь Моисеев шулай тигән: "Миңә матур ҡыҙ бирегеҙ, мин уны бейергә өйрәтәм. Әммә йәмһеҙ ҡыҙҙы матур булырға өйрәтә алмайым..." Шуға күрә лә мин ансамблемә һомғол буйлы матур ҡыҙҙарҙы алырға тырышам. Ҡайһы берәүҙәр мине бының өсөн әрләй ҙә. Беҙгә бик күптәр килә, шуларҙың араһынан һайларға тура килә инде.

Ишетеүемсә, һеҙҙең ҡыҙҙар репетицияларҙы ҡалдырмай, ваҡытында һуңламай

БЕЙЕҮҘӘРЕН... баҫып ҡарарлыҡ...

килә. Кемдер килмәһә, уның урынын алырға әҙер тороусыларҙың да айырым сираты барлыҡҡа килгән...

- Беҙгә мәктәп уҡыусыларынан тыш, студенттар, ауыл клубында бейеп өйрәнгән кисәге йәштәр килә. Уларҙы минең ярҙамсыларым махсус рәүештә бейергә өйрәтә, мин уларға, үҙегеҙ өсөн өйрәнегеҙ, тием. Беҙ башҡорт бейеүен үҙаллы сәнғәт төрө итеп өйрәнгән беренсе ансамбль иҫәпләнәбеҙ. Минеңсә, беҙ үҙ маҡсатыбыҙға өлгәштек. Беҙ эшләгәнде "Байыҡ" телевизион бәйгеһе ҙур кимәлдә тормошҡа ашыра.

Нисек уйлайһың, Гүзәл, башҡорт бейеүе башҡа халыҡтарҙың бейеүенән нимәһе менән айырыла? Минең, мәҫәлән, сәхнәлә башҡорт бейеүе башҡарылып, ат тояғы тауышын ишетһәм, йөрәгем дөпөлдәп тибергә тотона, халҡымдың вәкиле булыуыма ғорурлыҡ тойғолары кисерәм...

испандар был тойғоно дуэнде тип атай. Юғары эмоцияны, тойғоно, тамашасы менән артист араһындағы энергия алмашыуҙы улар шул һүҙ менән билдәләй. Башҡорт телендә лә был тойғоно билдәләүсе һүҙ барҙыр тип уйлайым.

Башҡорт бейеүе, аңлауымса, пластика күрһәтеүгә, тыпырлауға, нимәнелер һынландырыуға ғына ҡайтып ҡалмай, ул ниндәйҙер сюжетҡа ҡорола. Бейеүҙә идея мөһимме, әллә сюжетмы?

- Мин матур музыка ишетһәм, шундуҡ идея ла, сюжет та, пластика ла барлыҡҡа килә, бейеүҙең нисек булырын да күҙаллайым. Шуға күрә минең өсөн музыка беренсе урында тора. Сыңғыҙ улым "Сыңрау торна", "Кәмәләр" бейеүҙәренә бер нисә көй яҙҙы. "Кәмәләр"ҙе беҙ мәшһүр композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа бағышланыҡ, килеп сыҡтымы-юҡмы, уны тамашасы билдәләйәсәк. "Маһисәр-

ҡып һалынған ат ҡылына бәйләп аңлатҡас, ғалим: "Бөйөк һыҙланыу, бөйөк халыҡ!" - тип тәрән тетрәнеү кисерҙе.

- Мин был бейеүгә шундай ҙа фекер һалдым: ете ҡыҙ улар күктәге Етегән йондоҙ кеүек. Ерҙәге шундай һынауҙарҙы, ғазаптарҙы лайыҡлы рәүештә үткәндән һуң уларға унда рәхәт!

Башҡорт тарихының ошо "Ете ҡыҙ" кеүек үк тағы ла ниндәй биттәрен асып, бейеүҙәр һалырға ниәтең бар, Гүзәл?

- Әле интуитив рәүештә эш итәм. Башта әйткәнемсә, эшемде музыканан, бейеү көйөнән башлап ебәрәм.

Ансамбль ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына тора, ир-егеттәрҙе йәлеп итергә уйламайһығыҙмы?

- Беҙҙә педагог ир-аттар ҙа булды ваҡытында, шулай уҡ бейеүгә егеттәр ҙә йөрөнө. Бейеүгә

"Заһиҙә"һе булмаҫҡа тейеш әле? Үҙең башҡарыуында "Хан ҡыҙы" тамашасы тарафынан дәррәү ҡабул ителгәйне.

- Уйлайым. Шул уҡ ваҡытта Рәшиҙә Туйсинаның "Заһиҙә"һе хыял менән дә буй етмәҫлек бейеклек. Тәүге тапҡыр оҫта итеп башҡарылған бейеүҙән ҙур кинәнес алаһың да, икенсе берәүҙең шул уҡ бейеүенән тәүгеһендәй кинәнес ала алмайһың. Тәүге тапҡыр Рәшиҙә апайҙың "Заһиҙә"һен ҡарағанда кисергән тойғоларымды һаман да онота алмайым.

Һинеңсә Рәшиҙә Туйсина "Заһиҙә"һенең төп үҙенсәлеге нимәлә?

- Бейеү махсус рәүештә тик уның өсөн генә ҡуйылған. Фәзи Ғәскәров был бейеүҙе һалғанда Рәшиҙә апайҙың характерын, һын-килбәтен күҙ уңында тотҡан. Олоғая килә, Рәшиҙә апай был бейеүҙе күркәмерәк итә

Әҫәйем мәрхүмә ҡунаҡтарҙа Сәрүәр исемле ҡиәмәтлек һеңлеһе менән "Ай бикәсем, Мәликә" тигән бейеү сығарып башҡара торғайнылар. Ул бейеүҙең көйө лә бар. Йәғни, халыҡта иҫ киткес бейеү өлгөләре етерлек. Ғөмүмән, алдағы йылдарҙа ниндәй бейеүҙәр ҡуйырға идеяларың бар?

- Бер туҡтауһыҙ эҙләнәбеҙ. Беҙ йыл һайын яңы бейеүҙәр ҡуйыуҙы маҡсат итеп алғанбыҙ. Яңы бейеү ҡуйыр өсөн илһам кәрәк, ә илһам өсөн музыка талап ителә. Роберттың бөтә көйҙәренә лә бейеүҙәр ҡуйып бөттөк инде. Риф Ғәбитовҡа рәхмәт, ул үҙенең "Ҡоралай"ын бейергә рөхсәт итте. Бына бөгөн һин, Әхмәр ағай, "Гиңгерләк" бейеүе һалырға идея бирҙең, рәхмәт. Халҡыбыҙҙа ошондай идеялар өлгөһө бихисап, уларҙы күрергә, өйрәнергә генә кәрәк. Иң мөһиме, халҡыбыҙҙың ошондай матур бейеүҙәрен сәхнәгә сығара торған матур ҡыҙҙары бар! Ата-әсәләргә шундай матур ҡыҙҙар үҫтергәндәре өсөн оло рәхмәт. Әйткәндәй, сәхнәләге бар матурлыҡ, костюмдар барыһы ла уларҙың иҫәбенә тормошҡа ашырыла бит.

Донъя тамашасыһы башҡорт бейеүен нисек ҡабул итә? Үҙебеҙгә бейеүебеҙ күреп өйрәнгән тамаша кеүек, ә быға сит илдәргә сыҡһаҡ, башҡорт бейеүе барлыҡ призлы урындарҙы яулай.

- Беҙ Роберттың "Ҡурайсы" төркөмө менән Монакола, Италияла, Германияла булдыҡ. Беҙҙе һәр урында ла экзотика һымаҡ ҡабул итәләр. Шуға күрә лә сит илдә эшләүе еңел, сөнки һәр урында ла дәррәү алҡышлап ҡаршылайҙар һәм оҙатып ҡалалар. Беҙ концерт менән Спиваковтың залында ла сығыш яһаныҡ. Үҙебеҙҙә иһә, башҡа маһир бейеүселәр араһында 150-200 процентҡа нығыраҡ тырышырға тура килә. Һуңғы тапҡыр Питерҙа конкурста гран-при яулағандан һуң жюри рәйесе: "Мин һәр бер ҡызығыҙға айырым ғашиҡ булдым, быға тиклем күрелмәгән тамаша", - тип һоҡланыуын белдерҙе. Шул уҡ бейеү менән Өфөлә икенсе урынды алдыҡ.


Бейеүенә ҡарап, теге йәки был халыҡҡа ҡылыҡһырлама биреп буламы?

- Әлбиттә, мөмкин. Әйтәйек, испан ҡатын-ҡыҙы автобуҫҡа инеп баҫһа, уның янына барып баҫырмын тимә. Уларҙың хатта баҫып тороуҙарында тарихтары сағыла. Башҡорт бейеүе - төрлө планлы. Беҙ үҙебеҙҙең концерттарыбыҙҙа башҡорт ҡыҙын төрлө юҫыҡта күҙ алдына баҫтырабыҙ: ул йортоноң ҡотон, усағын һаҡлаусы ла, балаларын, ирен бағыусы әсә лә, ҡатын да, яугир ҙа һ.б.

Ҡыҙыҡлы әңгәмәң өсөн оло рәхмәт, Гүзәл Рәшит ҡыҙы! "Гиңгерләк" бейеүенең премьераһына саҡырырға онотмағыҙ!

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.

✓ - Нәркәс минең кәләшем, - тине теге егет уға текләп. Әйтерһең дә, аҡыл юйғыс был хәбәрҙе әңгәмәсеһе аңына теле менән генә түгел, ә күҙҙәре менән дә төртөп керетергә тырыша ине.



Ҡапыл ғына ул барыһын да аңланы...

Юҡ, был хәлдән донъя түнкәрелмәне. Ер ҙә тетрәмәне. Аяҡ аҫтындағы ялтыр мәрмәр ҙә сатнаманы, университеттың аҡ колонналары ла ҡойолоп ауманы, әүәлгесә ауыр таш ҡыйыҡты күтәреп тора бирҙеләр. Балҡып торған май айының аҡ сәскәләре лә тажdarындағы бер генә япраҡты юғалтманы был хәлдән.

Бар нәмә лә үҙ урынында ҡалды...

Тик йөрәгенең иң төбөндә, гүйә, кескәй генә сатнау яралды һәм сытыр-сытыр килеп, дауа белмәҫ һыҙланыу яралтып, төрлө яҡҡа тарала, йәйелә, киңәйә башланы. Ихтыярына ҡуйып тыймаһаң, һис шикһеҙ, ул сатнау йөрәкте генә түгел, ә уның барса ағзаларын, мейеһен, тән-күҙәһен селпәрәмә итергә янай ине...

"Һаҡла мине! Мине һаҡла!"

Зиһене шулай тип ҡысҡырҙымы уға, әллә күңеле илап ялбарҙымы шулай... Ул, нимәйҙер эске бойороуға буйһонып, күҙҙәренән атылып сығырға ынтылған хис-тойғоларына кәртә ҡуя алды.

Нуҡта белмәйенсә үскән аҫау айғырға йүгән кейҙереп, шул йүгән теҙгенендә һөйрәлеп йөрөгәнегеҙ бармы?..

- Ниңә дөрөҫтө яҙманың?

Шулай тигәндә үҙенең йылмайыуын, шул йылмайыуҙан йөҙөнөң йәмһеҙләнеүен, бар ҡиәфәтенең ҡотһоҙланыуын тойҙо.

Ә ҡыҙ, унан ике аҙымда ғына торған һушты алғыс һөйкөмлө әлиһә, күҙ алдында алмашынған ышанысһыҙ май күгеләй, бер йылмая, бер һүрелә...

Биш минут элгәре генә хәрби кейемле ҡупшы егет университет колоннаһы янында торған һөйгәнен күргәс, ҡояштай балҡып, таш күтәрмәләргә осоп менгәйне. Ғәзиз һынды ҡосоп, сәскәләй аңҡыған сәс толомдарына йөҙө менән ҡапланып, бер минутҡа онотолдо, шул саҡта, гүйә, Ер шары үҙе лә әйләнеүенән туҡтап, ошо минутты үткәрмәй һаҡларға иткән һымаҡ ине. Ҡыҙ башта иреп торҙо, унан һаҡ ҡына тартҡылаша, этәрә башланы һәм һуңында асырғанып төртөп ебәрҙе. Уңайһыҙлана, тип ҡабул итте быны егет, яндарында бер туҡтауһыҙ тегеләй-былай үтеп торған студенттар, уҡытыусылар күп бит. Артҡа сикте лә тештәрен балҡытып көлдө.

- Бәй, шул ҡәҙәрем итеп төртмәһәңсе, аппағым! Мин һиңә яттыр шул? Һағындым даһа...

Тап шул мәлдә күктән һибелгән сағыу ҡояш нурҙары ҡыҙ бармағындағы балдаҡта емелдәне. Сығанаҡ бармаҡта!..

Күңеле менән ниндәйҙер бер иҫ киткес фажиғә барлығын тойҙо ул ошонда. Тик зиһене, әллә үҙе шунан ҡасырға тырышыпмы, әллә уны һаҡларға маташыпмы, ысынбарлыҡты ҡабул итергә теләмәйенсә, был хәлде нисек тә урап үтергә аҙаплана ине, ахыры.

Егет ирекһеҙҙән ике аҙым артҡа сикте лә алдындағы һынға төбәлде. Бынан ҡарауға Нәркәсенең һыҙаттарын эҙләр ине, үҙе лә һиҙмәҫтән. Һәм бына, һағыныуынан күҙҙәре тоноп, осраҡлы ғына тап булған оҡшаш, әммә үлемдәй сит ҡыҙҙы ҡосаҡлап үпмәһенме. Вәт, мәрәкә!

Тик ҡыҙыйҙың һул сикәһендәге ҡара мәрйендәй генә бынауы миңе... Нәркәстә лә бар ине бит ундай миң... Юҡ, Нәркәстең миңе түбәнерәк торор ине, ә был өҫтә, ҡолаҡ янында тиерлек!

Көслө уй-кисерештәр кешенең аң-күңелендә күҙ асып йомған арала ғына балҡып үтә бит. Шартлау һымаҡ булып. Шартлау һымаҡ шаңҡытып, хәтерҙә бер ҡасан да юйылмаҫ йәрәхәт һалып...

- Ғәфү итегеҙ, һылыу, - тине сикһеҙ уңайһыҙлыҡ кисергән егет. - Яңылыштым...

Ҡыҙыл ҡамыштай керпектәрен елпеп ҡарашын күтәрҙе лә егеткә баҡты. Ер бәүелгәндәй булды шунда аяҡ аҫтында.

Уның алдында, ысынлап та, Нәркәс, уның Нәркәсе тора ине!

Ул шаңҡыны. Ул тамам аҙаны. Тик килеп тыуған был сәйер хәлдә үҙенең төп сәбәп булыуын, һәм, шул уҡ мәлдә, ошонда сикһеҙ ҡыр, ят икәнлеген тойомлай башлағайны. Шунда уның СА хәрефле ҡара погондарына кемдеңдер ҡулы ятты. Артына әйләнде...

Аҡ күлдәкле, ҡара салбарлы егет. Буйға уның менән типәтиң. Һын-килбәте лә тап уныҡы ишеләй. Ҡара күҙҙәре тыныс, тура ҡарайҙар, уларҙа уҫаллыҡ юҡ.

- Сәләм, һалдат, - тине ул тоноҡ ҡына тауыш менән. Йылмайырға итте, керпектәре елпенде. - Ҡарале, әйҙә, ситкәрәк китеп һөйләшеп алайыҡ. Юғиһә, Нәркәскә тулҡынланырға ярамай...

Мәрмәр ташлы университет күтәрмәһенең ситенә йүнәлделәр. Әйләнеп, Нәркәскә ҡараш ташланы тағы. Ҡыҙ күлдәй тулышҡан күҙҙәрен был тарафҡа юнәлткән. Тик ҡарашы, гүйә, бушлыҡҡа төбәлгәйне...

- Нәркәс минең кәләшем, - тине теге егет уға текләп. Әйтерһең дә, аҡыл юйғыс был хәбәрҙе әңгәмәсеһе аңына теле менән генә түгел, ә күҙҙәре менән дә төртөп керетергә тырыша ине. - Беҙҙең өйләнешеүебеҙгә ярты йыл инде... Бала көтәбеҙ...

Һалдаттың битенә ут ҡабынғандай булды. Ул сайҡалып китте, эргәләге колоннаға терәлде.

- Һуң... Ә кем миңә хат яҙҙы һуң, көтәм, тип? Һуңғы хаты ярты ай элек кенә килде лаһа!

- Беләм, - тегенең ҡаҡса йөҙөндә көләмһөрәү сағылып ҡалды шунда. - Беҙ... Эйе, Нәркәс яҙҙы ул хаттарҙы. Дөрөҫтө яҙырға ҡурҡты, йәнәһе, һин армияла, һуғышта, ҡорал менән, тип... Аңлайһыңмы? Бына шулай, дуҫ, хәлдәр...

Егеттең тәне эҫеле-һыуыҡлы булды, ул кинәт кенә тирләште, йөҙөнә йәбешкән үрмәксе ауҙарынан арынырға теләгәндәй итеп, устары менән ҡат-ҡат сикәләрен һыпырҙы. Зиһене тамам ҡаҙашты. Тирә-йүн кинәт кенә асыҡ күргән төш һымаҡ була башланы, күмәк кеше, машина тауыштары алыҫайып тоноҡландылар, колонналар ҡыйшайҙы, ә алдында торған кешенең кәүҙәһе юҡҡа сығып, һауала күҙле-ауыҙлы башы ғына бәүелә ине...

- Күреүемсә, дуҫҡай, һин артыҡ бошонаһың быға. Юҡҡа ғына! Әйткәндәй, Нәркәс һөйләгәйне шул бигерәк ныҡ яратыуыңды... Ҡулыңа ал үҙеңде, һалдат! Күҙҙәреңде ас, ҡара ян-яғыңа! Күрәһеңме, янында ғына күпме һылыуҡайҙар күбәләктәй осоп йөрөй! Бөтәһе лә һинеке! Буйҙаҡ бит һин, эх, шәп саҡ! Хатта мин үкенебеҙәк йөрөйөм өйләнгәнемә, бынауындай хур ҡыҙҙарын күргәс. Мин өйләнгәс, ҡыҙҙар күбәйҙе, тигән бит әле бер байғош, ha-ha!

Һалдат, үҙе лә һиҙмәҫтән, алдындағы күҙ-ҡаш, ауыҙ-танау төшөрөлгән шар һымаҡ бәүелгән йөҙгә һелтәнде. Әммә яҙа һуҡты. Һуғыуы ла, сирле кешенеке һымаҡ йәпһеҙ, хәлһеҙ ине. Шундуҡ ян-яҡта ниҙер һиҫкәнде, шау-шыу ҡупты, кемдер уның түшенә төрттө, ҡысҡырҙы, алдында Нәркәстең йәш тулы күҙҙәре бер мәлгә генә пайҙәләнде лә, юғалды...

...Гөрләп торған ҡала май айының йылы асфальтынан барған ҡупшы һалдатты бар тип тә белмәне. Аҙмы ни яҙын-көҙөн хеҙмәттән ҡайтып, үҙҙәрен тоткондан ҡотолғандай иркен тойған дембелдәр? Ана, зәңгәр беретлы десантсы килә дағалы итектәрен шаҡылдатып. Ана, ҡара формалы моряк атлай, клешлы салбар балаҡтарын елберҙәтеп... Йәш айғырҙай һомғол, матур, ҡупшы егеттәр, ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөрәктәрен һиҫкәндереп, күҙҙәрен тоҡандырып, уларҙа ғишыҡ шәһүәтен уятып, гонаһҡа дусар итеүселәр... Шуға ла һөйөүгә, шәһүәткә, наҙға сорналған яҙғы тормош, мөхәббәт көткән йәш һылыуҙай, бер ни күрмәйенсә, танымайынса, үҙ-үҙен юғалтҡандай алйып йөрөгән был һалдатты инҡар итеп, уны аңламаны ла, белмәне лә...

Үҙен яман һаташыуҙан уянғандай итеп тойған егет, аҙмы-күпме иҫ алғас, скверҙағы эскәмйәлә ултырғанын белде. Бейек яр башында - атлы Салауат һөйкәле. Түбәндә ташҡын Ағиҙел йәйрәй. Бар тирәлә сәскә-гөллө, йәш япраҡлы яҙ йәме. Эйе, барыһы ла элеккесә. Тик ул ғына көтмәгәндә түңкәрелгән күңелен һәм шул сәбәпле кинәт кенә хасил булған яңы булмышын ҡабул итә алмай ғазаплана ине бында. Шуға ла ошо хозур күренеш әле генә тупҡа тотоп ҡыйратылған гүзәл йортто ышыҡлаусы алдаҡсы парҙә булып тойолдо уға. Уның йортон, хыялында Нәркәс менән бергә ҡорған тормошон...

Тимер юл күпере аша уҙған вагондар теҙмәһе йәшел урман артындағы зәнгәр офоҡҡа табан тәгәрләй... Бөгөн кис уға ла шул тарафҡа юлланыу фарыз. Унда, тау-урмандар араһындағы бәләкәй генә ауылда, уны ата-әсәһе көтә. Тик был күңел менән нисек ҡайтып керер ул тыуған йортона? Бәлки, бер юлы киленегеҙҙе лә алып ҡайтырмын таныш-күрмешкә, тип яҙғайны бит ул һуңғы хатында. Ҡылансыҡланып, иңрәү аша йылмайып-көлөп, алдап буламы ни атай-әсәйҙе? Улар бит күҙҙәренән үк аңлап белә балаларының уй-күңелен...

Бөгөн таңда, үҙе лә көтмәгәнсә, поездан төшөп ҡалды ул. Туҡталышта тәҙрәгә ҡарағайны, таныш станция атамаһы күҙенә салынды. Бәй, Нәркәсенең ауылы бынан өс саҡрымда ғына тора лаһа! Төштө лә поездан, китте лә барҙы шул тарафҡа атлап. Күрмәгән, йөрөмәгән ер түгел дә, таныш туғай, таныш һуҡмаҡ... Ысынлап та, ҡайҙа ҡабалана әле ул? Үҙ ауылына ҡасан ҡайтып төшһә лә һуң булмаҫ. Нәркәсен өҙөлөп һағынған бит ул, Нәркәсен күреү көрәк уға башта, бер минут ҡына булһа ла ҡосағына алып шул гүзәл һынды, онотолоп тороро ға, һөйөүгә сарсаған күңелен танһыҡларға! Бер юлы һөйгәненең ата-әсәһе менән һөйләшеп, уларҙың ризалығын алырға... Армияға китер алдынан, Нәркәсе уны ауылына саҡырып, ата-әсәһе, туғандары менән таныштырғайны. Шуға ла уларҙы һис тә ят тоймайынса, күңелендә ҡайны менән ҡәйнә иткәйне инде...

Шундай матур ине таң! Ҡояш ҡалҡҡан саҡ, туғай-әрәмәләр зәңгәрләнеп тора, ҡоштар бер-береһен уҙырып һайрай, кәкүк саҡыра... Барып керҙе "ҡайны-ҡәйнә" йортона. Тегеләр башта албырғап ҡалдылар, унан йылмайып-көлөштөләр, "ҡайны" кеше хатта ҡосаҡлап та алды "кейәүен". Тик Нәркәс өйҙә юҡ ине, улар Өфөлә бөгөн, тинеләр. Ә "балдыҙы", ул юҡта еләктәй булып бешеп еткән Нурия, әүәле үҫмерлек әрһеҙлеге менән "еҙнәһенең" күҙҙәренә кереп барған Нурия, уны күргәс, сикәләре кинәт кенә уттай тоҡанып, устары менән битен ҡаплап торҙо ла, йүгереп өйгә кереп юғалды. Башҡаса күренмәне... Аласыҡта сәй ҡуйҙылар. Шунда ғына ул хужаларҙа ниндәйҙер бер аңлайышһыҙ сәйерлек, уңайһыҙлыҡ барлығын тоя башланы. "Ҡайны менән ҡәйнә" бер-береһенә йыш ҡына һораулы ҡараштарын төбәп тынып ҡалалар, әйтерһең дә, күҙҙәре менән генә һөйләшеп, нимәгәлер яуап таба алмай ыҙалайҙар ине. Ир кеше бер-ике тапҡыр ҡаты ғына тамаҡ ҡырып, ауыҙын бәлшәйтеп, яурын атып та алды ҡатынына. "Һин белмәгәнде мин ҡайҙан беләйем!" - тип өнһеҙ генә ҡысҡыра ине ул, гүйә, шул мәлдә барлыҡ һын-ҡиәфәте менән.

(Дауамы бар).

✓ *Һорашып ҡараһаң, ҡайһы саҡта "Ленин танылған артист йә йырсы булған", йә "Илдең беренсе президенты йә етәксеһе" тигән ҡыҙыҡ яуаптар алырға мөмкин. Ленин бабайҙың кем икәнен балаларға аңлатабыҙ, танытабыҙ.*

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

Ғәҙәттә, бигерәк тә балалар һәм йәштәр өсөн музей - ул боронғонан ҡалған, әллә ни ҡыҙыҡ булмаған урын тип күҙ алдына баҫа. Ә ысынбарлыҡта унда ниндәй мөхит, ниндәй эштәр башҡарыла - ошолар хаҡында Өфө ҡалаһындағы В.И. Ленин йорт-музейы директоры Хәлил Ғәббәс улы ХӘМЗИН менән әңгәмә ҡорҙоҡ.

БЫЛ МУЗЕЙҘА...

Ленинды терелтеп ебәрҙеләр



➔ **Бер кемгә лә сер түгел, һуңғы йылдарҙа Ленин музейы юлында эҙҙәр һыуынғайны, һеҙ уның эшенә яңы һулыш индерҙегеҙ, ахыры?**

- Бик күптәр шаяртып: "Музейҙы йәнләндереп, Ленинды терелтеп ебәрҙең", - тип әйтә. Эшләнгән һығымталарға, пландарға ҡарамаҡ, килеүселәр һаны, ысынлап та, күбәйҙе. Кешеләрҙе төрлө алымдар, мәҙәни саралар менән йәлеп итергә тырышабыҙ. Беҙҙең иң масштаблы проектарыбыҙҙың береһе - республика кимәлендә икенсе йыл рәттән үткәрелгән "Катюша. Еңеү йырҙары" тип исемләнгән патриотик акция. Бәләкәй балаларҙан алып ветерандарға саҡлы - күптәргә оҡшай, күптәр ҡатнаша был сарала. Былтыр ул тынлы оркестр менән берлектә үтһә, быйыл бар йыйылған халыҡ музейҙы тирәләтеп, тәндәр зымбырлап китерлек итеп еңеү йырҙарын йырланы. Иң мөһиме, "Катюша" йыры ике телдә: рус һәм башҡорт телендә йырлана - был ҡалабыҙҙа йәшәгән төрлө милләт халҡын берләштерә.

Шулай уҡ мәктәптәр менән әүҙем эш алып барабыҙ. Бына йыл ярым инде В.И.Ленин йорт-музейында "Музейҙа тарих дәрестәре" тип аталған проект эшләп килә. Ул беҙҙең Йәмғәт палатаһы, Дәүләт Йыйылышының Мәҙәниәт буйынса комитеты, Рәсәй хәрби тарихи йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе, Мәғариф министрлығы менән кәңәшләшеп уйлап сығарған проектыбыҙ. Хәҙер ул мәктәптәрҙә киң билдәлелек алды, уҡыусылар күпләп йөрөйҙәр. Балалар өсөн иң ҡыҙығы шунда: был дәрестәрҙә уҡыусыларға тотош илдең генә түгел, ә үҙҙәре уҡыған мәктәптәрҙең, йәшәгән райондарының, Өфөнөң тарихын һөйләп үтәбеҙ. Мәҫәлән, 1917 йылдағы Октябрь революцияһы ваҡытында улар уҡыған мәктәптәр булғанмы, нисәнсе йылда нигеҙ һалынған һ.б.

Унан башҡа беҙҙә "Музей ҡунаҡханаһы" шулай уҡ бик уңышлы эшләп килә. Уның сиктәрендә төрлө күренекле даталар айҡанлы йырсыларҙы, әртистәрҙе, яҙыусыларҙы уҡыусы балалар менән осраштырабыҙ. Ленин образын күп тапҡыр сәхнәгә сығарған М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры менән әүҙем эшләйбеҙ. Ә республикала тормошҡа ашырылған "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге" проекты сиктәрендә оло йәштәге кешеләр беҙгә ҡунаҡҡа килә. Сәй өҫтәле артында улар шулай уҡ йәш буыын менән осраша, әңгәмә ҡоралар, төрлө бәхәстәргә, хәтирәләргә төшөп китәләр.

Киләсәктә "Башҡортостандың танылған шәхестәре" тигән бик ҡыҙыҡлы проект булдырырға уйлайбыҙ. Тарих, иктисад һәм башҡа өлкәләрҙәге билдәле кешеләр менән осрашыуҙар, танышыуҙар ҡунаҡтарға бик ҡыҙыҡлы булыр тип уйлайбыҙ.

➔ **Музей эше быға тиклем һеҙгә таныш инеме?**

- Мин үҙем һөнәрем менән музыкант-башҡарыусы, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлаған саҡта БР Милли симфоник оркестры ойоштороло башлаған ғына ваҡыт ине, мин уның беренсе составына эләктем, оҙаҡ ҡына йылдар эшләп киттем. Ҡыҫҡаһы, музей эшенә тиклем минең тормошом мәҙәниәт, музыка менән бәйле ине. Шуға күрә, Өфө ҡала хакимиәтенең Мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығынан Ленин музейын етәкләү тәҡдимен ишеткәс, бер аҙ аптырап ҡалдым. Шулай ҙа ризалаштым.

Әйткәндәй, минең тормошомда Ленинға бәйле бер ҡыҙыҡлы ғына хәл булғайны. 2011-2016 йылдарҙа, "Культурный мир Башкортостана" мәҙәни интернет порталы етәксеһе булып эшләгән ваҡытта, хеҙмәттәштәрем миңә Ленин һүрәте төшөрөлгән өҫтәлгә ҡуя торған сувенир бүләк иткәйне. Уның "Цели ясны, задачи определены. За работу, товарищи!" тигән күптәргә билдәле яҙыуы ла бар ине. Мин шул бүләкте йыш ҡына иҫкә алам, үҙенә күрә бер күрәҙәсәлек булған кеүек был хәл. Сөнки музейҙа эшләрмен тип ғүмеремдә лә уйламағайным.

Ижади кеше булараҡ, йәнем шулай ҙа мәҙәни проектар ойоштороуға, тормошҡа ашырыуға тартыла. Музейҙа бик күп саралар булып тора, музей хеҙмәткәрҙәре лә бик әүҙем генә ҡатнаша, әммә минең быға тиклем эшләгән проектарым ҙур масштаблы ине, шуға музей залдары тәүҙә тығыҙыраҡ һымаҡ күренде. Бинаны ҙурайтырға тигән уйҙар булды, әлбиттә, тик музейҙың федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объекты булыуы эште ҡатмарландыра, уға үҙгәрештәр кереткәнгә ярамай.

Минең үҙемдән йыш ҡына: "Ленин һеҙҙең өсөн кем ул?" - тип һорайҙар. Уның сәйәси ҡараштары - икенсе айырым тарих, әммә Ленин, минеңсә, үҙенсәлекле бер гений ул. Хәҙер беҙҙең һәр беребеҙҙә телефондар, башҡа төрлө гаджеттар, интерет селтәрҙәре бар, ә үҙ ваҡытында Лениндың ундай мөмкинлектәре булмаған бит. Ә шулай ҙа ул сит илдә "Искра" гәзитен баҫтырып, сумаҙан төбөндә уларҙы йәшереп илгә алып ҡайтып, ҡалаларҙа таратып, сәйәсәт тураһында бер ни белмәгән халыҡты күтәрә, революция утын дөрләтә алған бит.

➔ **Совет заманында үҫкән быуын өсөн Ленин исеме ҙур әһәмиәткә эйә, ә хәҙерге йәштәр уны ҡабул итмәй ҙә шикелле, кем икәнен беләләрме?**

- Кемдер белә, кемдер белеп бөтмәй... Һорашып ҡараһаң, ҡайһы саҡта "Ленин танылған артист йә йырсы булған", йә "Илдең беренсе президенты йә етәксеһе" тигән ҡыҙыҡ яуаптар алырға мөмкин. Шул саҡта беҙ үҙебеҙҙең төп эшебеҙгә тотонабыҙ ҙа инде: Ленин бабайҙың кем икәнен балаларға аңлатабыҙ, танытабыҙ.

Әйткәндәй, беҙҙең музей Ленин һәм Крупскаяның тормошон бәйән итеүсе генә түгел, беҙ илдәге, республикалағы тарихи һәм хәҙерге заман хәлдәрен дә һөйләп үтәбеҙ. Былтыр, мәҫәлән, Республика көнөнә ҡарата ойоштороло сараға тарихсыларҙы саҡырҙыҡ, улар килгән кешеләргә беҙҙең Башҡортостаныбыҙ нисек ойоштороло, Лениндың унда ҡалдырған эҙе хаҡында бик ҡыҙыҡлы итеп һөйләне. Шулай итеп, кешеләр Башҡортостан тарихын да, Лениндың кем икәнен дә, республика менән уның нисек бәйле булыуы хаҡында ла белеп ҡайталар.

➔ **Музейға күберәген кемдәр килә? Оло быуынмы, әллә йәштәрме?**

- Лениндың шәхесе һуңғы ваҡыттарҙа бигерәк тә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ҡайһы саҡта беҙгә килгән кешеләр музейҙың ҡунаҡтар менән тулы, хатта баҫырлыҡ урын булмауына аптырап ҡайталар. Ҡытай Республикаһы, Төньяҡ Кореянан һәм башҡа сит илдәрҙән, ҡалаларҙан туристар, шулай уҡ үҙебеҙҙең республика халҡы ла күпләп килә. Күптән түгел 1985 йылда мәктәпте тамамлаған, пионер ҙа, комсомол да, коммунист та булып өлгөргән бер класта уҡығандар килделәр. Уларҙың бер класташтары егерме йылдан ашыу Ҡытайҙа эшләгән, ә унда әлеге ваҡытта ла Ленинды ныҡ ихтирам итәләр тип һөйләп китте ул ҡунағыбыҙ.

Йәшкә ҡараһаң, статистика буйынса килеүселәрҙең яртыһы ололар, яртыһы - йәштәр. Ололар мотлаҡ балалары менән килә, хатта үтә ҡыҙыҡһыныу тоймаһалар ҙа, иҫтәлектәре менән бүлешәләр, үҙҙәрен пионерға алған мәлдәрен йылылыҡ менән иҫкә алалар. Уҡыусыларҙың үҙҙәре генә килеүҙәре бик һирәк күренеш, әлбиттә.

Тарих факультетында белем алған студенттар күпләп килә. Яңы ғына БДПУ-ның тарих факультеты студенттары тарафынан "Музейҙа тарих дәрестәре" проектын алып барыу хаҡында һөйләшелде, улар өсөн был бик тә яҡшы практика буласаҡ. БР Йәмәғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары Рәмил Нәсибулла улы Рәхимов тап ошо проекттың патриотик яҡтан бик ҙур әһәмиәткә эйәлеген билдәләп, уны масштаблыраҡ итеү, башҡа мәктәптәрҙә лә тормошҡа ашырыу планын тәҡдим иткәйне. Хәҙер беҙ БДПУ һәм Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте менән берлектә октябрь айында үтәсәк "Яңыртылған Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын тормошҡа ашырыу шартарында тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү буйынса белем сифатын тәьмин итеү" III Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһында ошо "Музейҙа тарих дәрестәре" проектының презентацияһын үткәрергә ниәтләйбеҙ. Бәлки, ошо проект беҙҙең музейҙан бөтә Рәсәйгә таралып китер әле, Аллаһ бирһә.

Шулай итеп, был әңгәмә В.И. Ленин йорт-музейы әле төрлө ҡыҙыҡлы проектары менән килеүсе ҡунаҡтарҙы таң ҡалдырыр, белемгә әйҙәр, тигән өмөттәр тыуҙыра.

Айһылыу ДАУЫТОВА
яҙып алды.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

ҠОШТАР ТОҒРОЛОҒО...

Ғилман Ишкининдың ҡыҙыҡ ҡына бер шиғырына барып юлыҡтым:



Кешеләр араһында йәшәүҙе
Экологик яҡтан хәүефле тип,
Күптән-күптән иғлан иткән
ҡоштар һәм дә кейектәр
йыл һайын алтын көҙҙә
ҡанатлы вәкилдәрен көньяҡҡа
ҡоролтайға оҙаталар һәм
түҙемһеҙләнеп, яңылыҡтар көтөп,
ҡаршы алалар...
Яҙ алып ҡайтыуҙарын.

Бынан бер нисә йыл элек Баймаҡ районының элекке "Йылайыр" совхозы баҫыуына меңәр-меңәр баш, иҫәпһеҙ-һанһыҙ торналар тубы төшөп, мин дә был күренеште "Торналар ҡоролтайы" тип атап, "Киске Өфө"лә яҙып сыҡҡайным. Ғилман был шиғырында ҡоштарҙың көҙөн йылы яҡҡа осоуының сәбәбен "кешеләр араһында йәшәүҙе экологик яҡтан хәүефле" тип уйынлы-ысынлы атай.

Миңә ҡалһа, ҡоштар йылы яҡҡа, халҡыбыҙҙың боронғо йолаһына ярашлы, йәйләргә генә ҡуҙғала ла, яҙҙар еткәс, икенсегә йәйләргә беҙгә кире әйләнеп ҡайта.

Урынлы һорау тыуа: ә ниңә мәңгелек йәйҙәр иләндә тороп ҡалмай, шунда йәшәмәй һуң ҡоштар? Сөнки Уралтауыбыҙ, Башҡортостаныбыҙ уларҙың тыуған яғы һәм улар себештәрен тап беҙҙә баҫып сығарып, уларға тыуған ил тойғоһон һеңдерә. Тимәк, беҙҙән айырмалы рәүештә, ҡоштар үҙ асылын һаҡлап ҡалыр өсөн тыуған еренә тоғролоҡ һаҡлай...

Хәҙер башҡорт балалары донъяның ниндәй генә урынында тыумай. Уларҙың ата-әсәләре үлергә генә булһа ла, тыуған яғына ҡайта ҡайтыуға. Ә балаларының күбеһе беҙҙеке түгел, сит ерҙәрҙең, сит ҡәүемдәрҙең вәкилдәренә әүерелә.

Әйткәндәй...

Ошоғаса һандуғас булып һайраған турғайҙы, турғай булып сырҡылдаған һандуғасты ишеткәнем булманы - туған телдәренә лә тоғро ҡоштар. Тимәк, Ғилман дуҫыбыҙ әйтмешләй, ҡоролтайҙарҙы юҡҡа ғына үткәрмәй улар...

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

ИНТЕРНЕТТАН



ИҢ СӘЛӘМӘТ ИЛ ҠАЙҺЫҺЫ?

■ Иң бәхетле ил рейтингыһын төҙөүселәр, ғәҙәттә, эске тулайым продукт, йәмғиәттәге ышаныс, коррупция, шулай уҡ йомартлыҡ кимәлдәре, фаразланған ғүмер оҙайлығы, һайлау мөмкинлеге күрһәткестәрен сағыштыра. Рейтингта һәр ваҡыттағыса Дания менән Норвегия лидерҙар булып тора. Өсөнсө урынды элек Финляндия алһа, хәҙер - Швейцария. Шулай уҡ тәүге бишәүгә исемлегенә традицион бәхетле илдәр Нидерландия һәм Швеция ингән. Иң сәләмәт ил тип Япония табылған.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло бутҡаһы тора. Был бутҡала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлекте артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һомбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сәтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - көртмәле, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урынды омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлекте холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

■ Вестмид Миллениум медицина тикшеренеүҙәре институты ғалимдары билдәләүенсә, беҙҙең биоритмдар эшмәкәрлеген бауыр контролдә тота. Бауырҙа май, энергия алышыныуы метоболизмы, шулай уҡ гормондар бүленеп сығыуға яуаплы рецепторҙар бар, уларҙың эше йоҡоға, аппетитҡа һәм иғтибарға йоғонто яһай. Ритмдарҙың боҙолоуы иһә һимереүгә, диабетҡа һәм организмда матдәләр алышыныуының башҡа тайпылыштарын барлыҡҡа килтерә. Алдараҡ билдәле булыуынса, биологик сәғәттәрҙең боҙолоуы тиренең иртә ҡартайыуына, тире яман шешенә килтереүе бар. Шуға ла биологик сәғәттәрҙе көйләп ебәреү был проблемаларҙы булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк.

■ Социаль селтәрҙәрҙе ҡулланмау аҡыл һәм ихтыяр көсө тураһында һөйләй, ти ғалимдар. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 71,5 проценты - ир-егеттәр, уртаса йәше - 31 йәш, шулай ҙа улар араһында 11 йәштән 75 йәшкә тиклемгеләр ҙә осраған. Улар 47 илдә йәшәй, "ташланған" онлайн-дуҫтарының һаны яҡынса - 133 кеше. Асыҡланыуынса, социаль селтәр донъяһынан баш тартыусылар ғәҙәти тормошта күпкә теүәлерәк, һағыраҡ һәм аҡыллыраҡ. Шулай ҙа уларҙың виртуаль аралашыуҙан баш тартыуының үҙ сәбәптәре лә бар, мәҫәлән, 48 процент яуап биреүсе үҙенең шәхси мәғлүмәттәренең хәүефһеҙлеге өсөн борсолған, икенсе урында ғына кеше был донъяның үҙен нығыраҡ ылыҡтыра башлауын тойған. Өсөнсө сәбәп - яуап биреүселәр тағы "дуҫтары"ның ҡылығын оҡшатмаған, уларҙың төрлө сараларға сақырыуын артыҡ әрһеҙлек тип иҫәпләй. Виртуаль һәм ысын дуҫ араһында айырма барлығын барыһы ла билдәләгән.

ӨЛКӘН ЙӘШТӘГЕЛӘР ҠОЛАҒЫНА

ҠАРТЛЫҠТЫ СИР ТИП ҠАБУЛ ИТМӘГЕҘ!



Әкрен генә атлап йөрөү, аяҡтарҙың тотороҡһоҙлоғо - ул фалиж түгел, ә мускулдарҙың тарҡалыуы, көсһөҙләнеүе. Был йәһәттән бер генә юл бар - дарыуҙар эсеү түгел, ә хәрәкәтләнеү.

Йоҡоһоҙлоҡ та сир түгел, ә мейе эшмәкәрлеге ритмының көйләнеүе. Был йоҡо "төҙөләшә", уның үҙенсәлегендәге үҙгәрештәр. Уйлап та тормаҫтан, йоҡоһоҙлоҡтан дарыу ашай башламағыҙ. Оҙаҡ ваҡыт буйына йоҡо дарыуы һәм башҡа препараттарға өйрәнеп китеүҙән аҡыл-фекерләү һәләте кәмей һәм боҙола. Һәйбәт йоҡлауҙың иң яҡшы сараһы - күберәк ҡояш нурҙарын һеңдереү һәм тороҡло режим.

Тән һыҙланыуҙары - ревматизм түгел, ә нервылар системаһының ҡартайыуына организмдың ҡәҙимге тәьҫир көсө. Күптәрҙең, ҡайһы ғына ерем ауыртмай - ҡулдарым, аяҡтарым, тип зарланыуҙарын ишетергә тура килә. Был йәһә лә ревматизм да, һөйәктәрҙең мурtланыуы ла түгел. Һөйәктәр, әлбиттә, йомшара, йоҡара бара, ләкин был 99 процент сир, һыҙланыу түгел, ә нервы импульстарын үткәреүҙең әкренәйеүе һәм һыҙланыуҙы көсәйтеүе. Был өлкән йәштә була торған физиологик үҙгәрештәр. Уны дауалау юлы - тағы ла дарыу түгел, ә күнекмәләр.

Холестерин. Өлкән йәштәгеләрҙә холестерин, ғәҙәттә, юғарыраҡ була, сөнки улар күберәк йәшәгән. Холестерин - ул гормондарҙы һәм күҙәнәктәр ярыһын нығытыусы сеймал. Ул бик түбән булһа ла яҡшы түгел, сөнки иммунитетты көсһөҙләндерә.

Өлкәндәр өсөн кәңәш ителеүсе ***ҡан баҫымы*** кимәле - 150/90-дан кәмерәк, ләкин ул йәштәр өсөн стандарт булған 140/90-дан кәмерәк түгел.

Ҡартлыҡты сир тип ҡабул итмәгеҙ. Ҡартлыҡ - ул үтелә торған юл. Өлкәндәр һәм уларҙың балалары өсөн әйтелә торған ошо һүҙҙе иҫтә тотоғоҙ: ҡартлыҡ менән бәйле бөтөн яйһыҙлыҡтар ҙа сир түгел. Икенсенән, өлкән йәштәгеләрҙең күбеһе ҡартлыҡтан ҡурҡа. Анализ һөҙөмтәләре һәм рекламаларҙан ҡурҡырға ярамай. Өсөнсөнән, балалар өсөн иң мөһиме - ата-әсәне дауаханаға алып барыу менән генә сикләнмәгеҙ, уларҙы саф һауала йөрөтөргә бергәләп сығығыҙ, улар менән күберәк аралашығыҙ, һөйләшегеҙ.

Ҡартлыҡ - дошман түгел. Дошман башҡа төрлөрәк атала, ул - торғонлоҡ. Урта йәштәр 50-нән 70-кә тиклем, алтын осор - 70-тән 80-гә тиклем, ә инде ҡартлыҡ - 80-дән 90-ға тиклем. Ғүмер оҙайлығы 90-дан башлана. Өлкәндәрҙең төп проблемаһы - яңғыҙлыҡ. Ғәҙәттә, ғаилә парҙары аҙаҡҡаса бергә ҡартаймай, кемдәлер тәүҙәрәк китә һәм тол ҡатын йә ир ғаиләләге башҡа ағзалар өсөн ауырлыҡ тыуҙыра. Шуның өсөн өлкәндәргә дуҫтары менән бәйләнештә өҙмәҫкә, улар менән йышыраҡ аралашырға һәм балалар, ейән-ейәнсәрҙәр өсөн, улар быны белдермәҫкә тырышҡан хәлдә лә, бәлә булмаҫҡа тырышырға кәрәк. Шундай кәңәш - үҙ тормошоғоҙға контролде юғалтмағыҙ. Был, тимәк, ҡасан һәм ҡайҙа йөрөргә сығырға, нисек туҡланырға, нимә кейергә, нимә уҡырға, кемгә шылтыратырға, ҡасан йоҡларға ятырға, ни менән шөғөлләнергә, нимә натып алырға, ҡайҙа йәшәргә һәм башҡа шундай мәсьәләләрҙе үҙаллы хәл итеү тигәнде аңлата.

Уильям Шекспир әйткән: "Мин һәр ваҡыт бәхетле!" Ә ни өсөн, белә-негеҙме? Сөнки бындай кеше бер кемдән дә бер ни ҙә көтмәй. Көтөү ул - ғазап. Проблемалар мәңгелек түгел, улар бер ваҡыт хәл ителә. Беҙ үҙ проблемаларыбыҙҙа үҙебеҙ ғәйепле. Дауалап булмаған берҙән-бер проблема - ул үлем.


Нимәгәлер мөнәсәбәт белдерер алдынан тәрән итеп һулағыҙ. Нимәлер әйтер алдынан... тыңлағыҙ. Тәнҡитләр алдынан үҙегеҙгә күҙ һалығыҙ. Яҙыр алдынан уйлағыҙ. Һөжүм итер алдынан... килешегеҙ, бирелегеҙ. Үлем алдынан... булдыра алған тиклем яҡшы йәшәп ҡалығыҙ! Иң һәйбәт мөнәсәбәт - идеаль кеше менән түгел, ә ҡыҙыҡлы, йөкмәткеле итеп йәшәргә өйрәнгән һәм өйрәнеүсе кеше менән.

Башҡаларҙың етешһеҙлектәренә иғтибар итегеҙ һәм шул уҡ ваҡытта улар менән һоҡланығыҙ, уларҙы яҡшы яҡтары өсөн маҡтағыҙ. Бәхетле булыр өсөн башҡаларҙы бәхетле итергә кәрәк. Нимәлер теләр алдынан тәүҙә үҙегеҙ нимәлер бирегеҙ. Үҙегеҙҙе яҡшы, ихлас һәм ҡыҙыҡлы кешеләр менән уратып алығыҙ һәм шуларҙың береһе булығыҙ.

(Интернет селтәренән).

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

СТӘРЛЕЛӘ БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘЛӘР



4-6 сентябрҙә Стәрлетамаҡта ҡалаға 260 йыл тулыуға арналған "Сауҙагәр" фестивале үтәсәк. Байрам программаһы сиктәрендә заманса музыканы, башҡорт телен һәм йәнле аралашыуҙы берләштергән "Мин башҡортса һөйләшәм" башҡорт теле фестивале лә ойошторола.

"Мин башҡортса һөйләшәм" фестивале 5 сентябрҙә Салауат Юлаев исемендәге скверҙа сәғәт киске 6-ла башлана. Программаның төп өлөшө - open-air концерт. Сәхнәлә "Бүреләр", BABY Ti һәм Тимур Ямалов сығыш яһаясаҡ. Сараны Динара Ғәлләмова һәм Салауат Заманов алып бара.

"Мин башҡортса һөйләшәм" фестиваленең ҡалабыҙҙың юбилей йылында тәүге тапҡыр Стәрлетамаҡта үтеүе беҙҙең өсөн айырыуса мөһим. Һуңғы йылдарҙа ҡалала этномәҙәни саралар күбәйә, беҙ уларҙың халыҡ, айырыуса йәштәр араһында зур ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул ителеүен күрәбеҙ. Фестивалдең заманса форматы башҡорт теленә һәм мәҙәниәтенә иғтибарҙы арттырыр һәм юбилей программаһының сағыу өлөшөнә әүерелер тип ышанам", - тип билдәләне Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Михаил Григорьев.

Фестиваль заманса мәҙәни форматтар һәм музыка аша башҡорт телен популярлаштырыуға йүнәлтелгән. Ойоштороусылар башҡорт теленең тарихи һәм мәҙәни мираҫтың бер өлөшө генә түгел, ә заманса ҡала тормошоноң тәбиғи теле булыуын күрһәтергә теләй. "Беҙ башҡорт теленең ҡала мөхитендә заманса, иркен һәм тәбиғи яңғырай алыуын күрһәтергә теләйбеҙ. Музыка - яңы быуындың телгә ҡыҙыҡһыныуын арттырыуҙың иң аңлайышлы ысулдарының береһе. Беҙҙең өсөн телде һаҡлау тураһында һөйләү генә түгел, ә кешеләр уның яңғырауын ишетә, тоя һәм көндәлек тормошта ҡуллана алған мөхит булдырыу мөһим", - тип һөйләне Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы директоры Гөлназ Йосопова. Фестиваль киске сәғәт 6-ла башлана. Инеү бушлай. 6+

Ләйлә АРАЛБАЕВА.

✓ *Баймаҡ районының Ирәндек аръяғы халҡы һөйләүенсә, татлы тамыр был тирәлә күпләп үҫкән. Күрәһең, малдың, бигерәк тә һарыҡтың, күбәйеүе уға кинәнеп үҫергә ирек бирмәйҙер.*

ИРӘНДЕК ҮҪЕМЛЕКТӘРЕ

БАЛАН



Балан (калина обыкновенная - Viburnum opulus L.) - беҙҙең тирәнең иң киң таралған һәм халыҡтың иң нык яратҡан үҫемлектәренең береһелер ул.

Халыҡ йырҙары, мәҡәлдәре ошо ҡыуаҡ менән бәйле булыуы ла бының сағылышы түгелме ни? Ысынлап та, йәмле һаҡмар, Төйәләҫ, Ағиҙел, Эйек, Ҡыҙыл һәм башҡа йылға буйҙарын йәмле иткән - ошо балан, тиһәк, бер ҙә яңылышмабыҙ. Май аҙаҡтары - июнь айҙарында, аҡ сәскәләргә төрөнөп, яңы төшкән киленде күҙ алдына баҫтырһа, көҙ көнө, ҡыҙыл емештәре менән маһайғандай, күҙҙең яуын алып, бөтә урманға йәм биреп ултыра ул. Уны күргәс, ирекһеҙҙән:

Аҡ сәскә ата балан,
Гөлгә күмелгәс ялан… -

тигән йыр юлдары иҫкә килеп төшә. Элек-электән үк ул халыҡта сафлыҡ һәм матурлыҡ символы булып иҫәпләнгән. Яңы өйләнешкән йәштәргә уның емешен ашарға тәҡдим иткәндәр.

Ә һуң кем генә кисен бөтә ауылға таралған быҡтырылған балан еҫен хәтерләмәй ҙә күҙ алдына килтермәй икән? Ә унан бешерелгән бәлеш, кеҫәл балаларҙың да, өлкәндәрҙең дә яратҡан ашамлығы икәнлеге һәр кемгә билдәле.

Балан, ғәҙәттә, ҡатнаш урмандарҙа, киң япраҡлы ағастар үҫкән ерҙә, ҡырҡындыларҙа, йылға, күл буйҙарында, һаҙҙа үҫә. Беҙҙең ғәйәт киң илебеҙҙең урман, урман-дала зонаһынан алып Кавказға, Ҡырымға тиклем таралған. Беҙҙең илдә баландың 10-ға яҡын төрө үҫә. Иң киң таралғаны һәм беҙгә билдәлеһе - ҡәҙимге балан. Ул - 1,5 - 3,5 м бейеклегендәге ҡыуаҡ. Өс-бишкә бүленгән эре тешле япраҡтары оҙон ғына япраҡ һаптарында урынлашҡан. Япраҡ аҫты бер аҙ йөнтәҫ, ә осонда лакка оҡшаған матдәләр бүлеп сығарыусы биҙҙәр урынлашҡан. Алһыу аҡ сәскәләре, бер тирәлә ойошоп, ҡалҡан һымаҡ сәскәлек барлыҡҡа килтерә. Емеше һарғылт, итләс, яҫы төшлө, әскелтем була.

Сентябрь аҙаҡтарында - октябрь айында емештәре тамам өлгөрә. Шулай ҙа уны беренсе һыуыҡ төшкәс йыйыу һәйбәтерәк, был саҡта уның әселеге кәмей һәм тәм керә.

Баландан ҡайнатма. 1 кг балан, 200 г шәкәр ҡомо, 200 г һыу кәрәк. Баландың һутын һығып алып, һыу, шәкәр ҡомо ҡушып, 5-10 минут ҡайнаталар һәм һыуытырға ҡуялар. Баланды шулай уҡ башҡа төр блюдолар әҙерләү өсөн дә ҡулланырға була.

Баландан морс. Ярты стакан балан, 1 л һыу, тәменә ҡарап шәкәр алына. Балан һутын ҡайнаған һыу менән ҡушып болғаталар. Шәкәр ҡомо өҫтәп, 3-5 сәғәткә һыуытырға ҡуялар. Бер аҙ андыҙ төнәтмәһе лә өҫтәргә мөмкин.

Баланға алма ҡушып әҙерләнгән компот. 200 г балан, 400 г алма, 300 г шәкәр ҡомо, 2 л һыу. Йыуылған баланды һәм алма киҫәктәрен шәкәр сиробында 8 минут ҡайнаталар. Компот табынға һалҡын килеш бирелә.

Баландан кеҫәл. 100 г балан һуты, 280 г шәкәр ҡомо, 90 г картуф крахмалы, 2 л һыу. Һыуҙың бер өлөшөндә крахмалды иҙеп, эҫе нутҡа өҫтәйҙәр һәм шунда уҡ болғата-болғата шәкәр сиробы ҡоялар. Бөтәһен бергә ҡайнаталар. Әҙер кеҫәлде һалҡын урынға ҡуйып алалар.

ҺАРЫ МӘТРҮШ



99 сирҙән дауа тип йөрөтәләр уны (зверобой продырявленный - Hypericum perforatum L.) борон-боронгдан. Ләкин уның малдар өсөн ағыулы үҫемлек икәнен дә оноторға ярамай. Һары мәтрүш составында гиперацин тигән пигмент бар. Һары мәтрүште ашаған малдың үлеүе ихтимал. Бәлки, бына ошоға ҡарап та уны рустар "зверобой" тигәндәрҙер. Башҡортса исеменә килгәндә инде ул тышҡы төҙөлөшө менән ҡәҙимге мәтрүшкәгә бик нык оҡшаған, шуғалыр инде, һары мәтрүш тип атағандар.

Австралияла һары мәтрүш - ныҡ таралған сүп үләндәре иҫәбендә. Ул унда Американан осраҡлы барып эләгә. Һары мәтрүш малсылар өсөн бер ҡазаға әүерелгән. Австралия һәм Америка ғалимдары һары мәтрүштән ҡотолоу юлын эҙләйҙәр.

Беҙҙең илдә һары мәтрүш дарыу үләне һанала. Уны йыл һайын тонналап әҙерләйҙәр. Шулай ҙа ул һаман етмәй әле. Һары мәтрүштән төрлө эсемлектәр, төнәтмәләр, иманин, новоиманин кеүек медицина препараттары яһайҙар. Һары мәтрүште хәҙер махсус плантацияларҙа үҫтереү сараһын күрәләр, файҙалы матдәләргә байыраҡ сорттарын сығарыу маҡсатында селекция эштәре лә алып барыла.

Һары мәтрүш составында төрлө витаминдар, фитонцидтар, эфир майҙары бар.

Һары мәтрүштән эсемлек. 2 - 3 аш ҡалағы ваҡланған үҫемлекте сәскәләре, япраҡтары менән бергә фарфор йәки эмаль һауытта ҡайнаталар һәм 30 - 40 минут йылы урынға тондорорға ултырталар. Төнәтмәне марля йәки һөҙгөс аша үткәреп, сәй һымаҡ, шәкәр йәки бал менән эсәләр.

ТАТЛЫ ТАМЫР



"Татлы тамырҙы (солодка Коржинского - Glycyrrhiza Korshinskyi Gri.) беләһеңме? Уның файҙалы үҫемлек икәнлеге билдәлеме, юҡмы?" - тип атайым күп йылдар элек үк һорағайны инде. Ул ошо үләндең 1921 йылғы йотлоҡта һәм унан һуңғы ауыр йылдарҙа берҙән-бер тәмләткес булыуын, аслыҡтан үлем хәленә еткән кешеләрҙең ошо үләндең тамырын сәйнәп һауығыуҙарын легенда итеп һөйләгәйне… Баймаҡ районы Татлыбай ауылының өлкән уҡытыусыларының береһе Юнир ағай Әбделкәримов та, ошо фекерҙе ҡеүәтләп: "Көнө буйы бесән эшләп арыйһың, ә ҡайтышлай ошо үләндең тамырын сәйнәһәң, яңынан көс ингәндәй була", - тип үҙенең йәш саҡтағы хәтирәләрен уртаҡлашты. Ул саҡта мин ғилем юлын яңы ғына башлап йөрөй инем әле. Әммә минең буласаҡ ғилми эшкә этәргес көс булды ул һүҙҙәр.

Татлы тамыр - ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған бик ҡиммәтле, һирәк осрай торған күп йыллыҡ дарыу үҫемлектәренең береһе. Ул беҙҙең илебеҙҙә Волга, Урал, Тобол, Ишим йылғалары араһындағы эндемик (тик ошо урындарҙа ғына осрай торған) үҫемлектәрҙән һанала. Татлы тамыр дала зонаһында, бер аҙ татырлы болондарҙа үҫә. Уны шулай уҡ йәй көнө ҡороп бөтә яҙған бәләкәй йылғаларҙың ярҙарында ла осратырға мөмкин. Тоҙло грунт һыуҙары булған урындар татлы тамыр өсөн һәйбәт шарттар тыуҙыра. Ул ҡылған, аҡтамыр, әрем араһында үҫергә ярата. Башҡортостанда уны Баймаҡ районының Байыш, Кәрешкә ауылдары һәм Хәйбулла районының Таштуғай, Мәмбәт тирәһендә һ. б. ерҙәрҙә осратырға мөмкин.

Баймаҡ районының Ирәндек аръяғы халҡы һөйләүенсә, татлы тамыр был тирәлә күпләп үҫкән. Күрәһең, малдың, бигерәк тә һарыҡтың, күбәйеүе уға кинәнеп үҫергә ирек бирмәйҙер. Бына шуның өсөн дә ул хәҙер бик һирәк осрай торған (юғала барған) үҫемлектәрҙең береһенә әүерелгән.

Бер аҙ тарихҡа иғтибар итәйек. Татлы тамыр - иң боронғо дарыу үҫемлектәренең береһе. Уның ғәжәп тәмле тамыры Боронғо Ҡытайҙа киң ҡулланылған. Тибет медицинаһында уны женьшень үҫемлегенән дә юғары баһалағандар. Был үҫемлек төнәтмәһенең күп ағыулы матдәләрҙе нейтралләштерә алыу үҙенсәлеген шул ваҡытта уҡ белгәндәр. Тибет медицинаһы раҫлауынса, татлы тамыр ҡарттарҙың көсөн һиҙелерлек арттырған, йәш организмды нығытҡан.

Был үҫемлектең тамырында 23 процентҡа тиклем (!) глицерризин бар. Ул үҫемлеккә тәм бирә лә инде. 4 процент тирәһе флавоноид бар. Татлы тамыр шулай уҡ төрлө эфир майҙарына, аспаратинға, аскорбин кислотаһына һәм башҡа физиологик актив матдәләргә бай. Бөтә әйтеп үтелгән сифаттар уны күп төрлө ауырыуҙарға ҡаршы тороролоҡ дарыу сифатында файҙаланырға мөмкинлек бирә.

Татлы тамырҙың морфологияһы тураһында бер нисә һүҙ. Ул, әйтеп үтелгәнсә - күп йыллыҡ үҫемлек. Бейеклеге 30 - 70 см, төп тамыры бик тәрәнгә - 8 метрға, грунт һыуҙарына тиклем етә. Сәскәһе 10 - 13 мм ҙурлыҡта, күкһел аҡ төҫтә, суҡ рәүешендә урынлашҡан. Емеше 1 - 3 см оҙонлоғондағы ҡуҙаҡ. Япраҡтары яҫы йәки киң эллипс формаһында, һабағы йөнтәҫ, тимгелле. Май-июнь айҙарында сәскә атып, сентябрь баштарында өлгөрә.

Үҫемлек тамырын сентябргә ҡаҙып алырға кәрәк. Һәйбәтләп һалҡын һыу менән йыуып, күләгәлә киптерәләр. Дөрөҫ киптерелгән тамыр һары йәки һоро төҫтә булып, мурт ҡына һынып торорға тейеш.

Татлы тамырҙы, үрҙә әйтелгән сифаттарын иҫәпкә алып, айырым плантацияларҙа сәсеп үҫтереү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Һуңғы йылдарҙа татлы тамыр яңынан күпләп таралып үҫә башланы. Быға, әлбиттә, һарыҡ малы көтөүҙәренең ҡырҡа кәмеүе сәбәпсе булды.

Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,
биология фәндәре докторы, профессор.

ЗИНһЕН КИҢӘЙТЕП...



КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Бүрекле тебейек
(Хохлатая синица (гренадерка)



Башында ослайып торған бүреге бар, арҡа өлөшө көлһыу-көрән, тамағы, елкәһе һәм күҙҙәре аша үткән һыҙаты - ҡара, башы, ҡорһағы һорғолтораҡ аҡ. Тауышы көслө, сағыу: "ци-цитррч".

Бер урында йәшәй, ояһы ҡарт ағас олондарында була. Шулай ҙа ҡышын ризыҡ эҙләп парк, баҡсаларға яҡын килеүе лә ихтимал. 7-10 йоморткa һала, 15 көн тирәһе баҫа. Йәш ҡоштар ояла 3 аҙна тирәһе йәшәй, июндең 15-тәренә улар ояна ташлап осоп китеп бөтә. Бөжәктәр менән генә туҡлана, айырыуса ваҡ ҡарышлауыҡтарҙы ярата.

Рәсәйҙең Европа өлөшөндәге, Урал аръяғының көньяғындағы яҡты ылыҫлы һәм ҡатнаш урмандарҙа көн итә.

Кама буйында һәм Ағиҙелдең түбәнге ағымдарындағы ылыҫлы урмандарҙа һирәк осрай, Көньяҡ Уралдың ылыҫлы урмандарында унан да аҙ (Ильичев, Фомин, 1988). 1937 йылдың июлендә Башҡортостан ҡурсаулығында осраған (Кириков, 1952). 80-90-сы йылдарҙа ошо ерҙәрҙә үк һарғая йылғаһы буйында бүрекле тебейектең ояһы барлығы асыҡлана.

Үрмәлсек турғай, тилеғош
(Обыкновенный поползень)



Турғайҙарҙың тағы ла бер төркөмө, ваҡ ҡына урман ҡоштары, ағас олоно буйлап еңел генә һикереп йөрөй, хатта баш түбән дә хәрәкәт итә ала. Исеме лә шунандыр - үрмәлсек һымаҡ ағасты урап-урап сыға. Башының өҫкө яғы - көлһыу, ҡорһағы - ерәнерәк, ҡабырғалары ерән. Күҙҙәре аша ҡара һыҙат үтә. Суҡышы осло, көслө, ҡойроғо ҡыҫҡа, тура, уның ситтәре аҡлы-ҡаралы.

Ағас олононда оя ҡора, көҙөн һәм ҡышын башҡа турғайҙарға ҡушылып, төрлө ерҙәргә күсеп йөрөй ала. Тумыртҡаның ояһына оялай ҙа, йыртҡыс ҡоштарҙан һаҡланыу өсөн уның ауыҙын балсыҡ менән тарайтып һылай. 5-6 йоморткa һала.

Бөжәктәр менән туҡлана, һирәгерәк орлоҡтар, сәтләүектәр ашай. Аҙыҡты ағас олононда таба, ҡайһы саҡта ергә төшөп тә сүпләй.

Йыры - көслө, "тюии" тип ҡабатлана ла ҡабатлана, "тьоч-тьоч-тьоч" йәки "тцит" тип ҡыҫҡыра.

Урман өҫтөнлөк иткән районларҙа ғәҙәти ҡош, баҡсаларҙа, парктарҙа ла осрай, тағараҡтарға ла осоп килә.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары"
китабынан.
(Дауамы бар).

РОССИЯ • ТРУД • НАРОДОВЛАСТИЕ • СОЦИАЛИЗМ
КПРФ

Человек имеет право жить, а не выживать

Заказчик: КПРФ-БАШКИРСКОЕ РЕСПУБЛИКАНСКОЕ ОТДЕЛЕНИЕ политической партии КОММУНИСТИЧЕСКАЯ ПАРТИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ, ИНН 0274052113.
Предвыборный агитационный материал публикуется бесплатно, согласно части 1 статьи 66 Федерального закона от 22.02.2014 № 20-ФЗ «О выборах депутатов Государственной Думы Федерального Собрания Российской Федерации»

КРАТКАЯ ПРОГРАММА ЛДПР

- ✔ Жесткий контроль в сфере ЖКХ
- ✔ Качественные дороги. Газ, электричество, горячая вода, сотовая связь и интернет в каждый дом
- ✔ Качественная медицина
- ✔ Безопасный, доступный и комфортный общественный транспорт
- ✔ Жесткий контроль в сфере экологии
- ✔ Борьба с коррупцией
- ✔ Сокращение количества чиновников
- ✔ Поддержка участников СВО и их семей
- ✔ Социальная поддержка семей с детьми, пенсионеров и ветеранов
- ✔ Обеспечение семей с детьми местами в детских садах и школах
- ✔ Развитие бесплатного массового детско-юношеского спорта. Бесплатное дополнительное обучение талантливых детей
- ✔ Доступное жилье
- ✔ Выделение земельных участков для многодетных семей только с инженерными коммуникациями, кредит на строительство дома с минимальной процентной ставкой
- ✔ Развитие туризма
- ✔ Привлечение инвестиций. Максимальная поддержка предпринимательской и инновационной активности, создание комфортной среды

18,19,20 СЕНТЯБРЯ ВЫБОРЫ
ГОЛОСУЙ ЗА КАНДИДАТОВ ОТ ЛДПР

Печатная площадь предоставлена безвозмездно избирательному объединению БАШКОРТОСТАНСКОЕ РЕГИОНАЛЬНОЕ ОТДЕЛЕНИЕ ЛДПР на основании ч. 1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ


ПАРТИЯ
НОВЫЕ ЛЮДИ
ХАЖИАХМЕТОВ ФАНИЛЬ
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №13


ЛДПР
18.19.20 СЕНТЯБРЯ
ВЫБОРЫ
ПРИХОДИ НА ВЫБОРЫ!
НЕ ДАЙ УКРАСТЬ СВОЙ ГОЛОС!
ГОЛОСУЙ ЗА КАНДИДАТОВ ОТ
ЛДПР




18,19,20 СЕНТЯБРЯ ВЫБОРЫ!
ТОЛЬКО ЛДПР
+7 (347) 246-30-38, Г. УФА, УЛ. СОВЕТСКАЯ, Д.18


18 19 20
СЕНТЯБРЬ 2026


ОЛЕГ ЕЛКИН
КАНДИДАТ В ДЕПУТАТЫ ПО ОДНОМАНДАТНОМУ ИЗБИРАТЕЛЬНОМУ ОКРУГУ №8
ЕДИНАЯ РОССИЯ
СИЛА В ЕДИНСТВЕ
Ответственность Доброта
СЕМЬЯ Опыт ЗНАНИЕ мудрость КОМАНДА
Решимость
Открытость
Безопасность
ЗДОРОВОЕ ПОКОЛЕНИЕ
ПЕЧАТНАЯ ПЛОЩАДЬ ПРЕДОСТАВЛЕНА БЕЗВОЗМЕЗДНО КАНДИДАТУ В ДЕПУТАТЫ СОВЕТА ГОРОДСКОГО ОКРУГА ГОРОД УФА РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН ПО ОДНОМАНДАТНОМУ ИЗБИРАТЕЛЬНОМУ ОКРУГУ № 8 ЕЛКИНУ ОЛЕГУ ЮРЬЕВИЧУ НА ОСНОВАНИИ Ч.1 СТ. 65 КОДЕКСА РБ «О ВЫБОРАХ»



АЙДАР ЗУБАИРОВ
КАНДИДАТ В ДЕПУТАТЫ ПО ОДНОМАНДАТНОМУ ИЗБИРАТЕЛЬНОМУ ОКРУГУ №11
ЕДИНАЯ РОССИЯ
СИЛА В ЕДИНСТВЕ
Поддержка РАЗВИТИЕ Малый бизнес
Семья ИНВЕСТИЦИИ ГОРОДСКАЯ СРЕДА
Экономика ПОТЕНЦИАЛ Цель Победа
город БУДУЩЕЕ новые возможности
Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади кандидату в депутаты Совета ГО г. Уфа РБ шестого созыва, выдвинутому Всероссийской политической партией «ЕДИНАЯ РОССИЯ» по одномандатному избирательному округу Октябрьского района одномандатный избирательный округ № 11 Зубаиров Айдар Сабирович


ПАРТИЯ
НОВЫЕ ЛЮДИ
АХМЕТЗЯНОВ АМИРХАН
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №4


18,19,20 СЕНТЯБРЯ ВЫБОРЫ!
ТОЛЬКО ЛДПР
+7 (347) 246-30-38, Г. УФА, УЛ. СОВЕТСКАЯ, Д.18


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ



СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан по избирательному округу №13 Миронову Сергею Александровичу на основании ч.1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».




18,19,20 СЕНТЯБРЯ ВЫБОРЫ!
ТОЛЬКО ЛДПР
+7 (347) 246-30-38, Г. УФА, УЛ. СОВЕТСКАЯ, Д.18


СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан по избирательному округу №4 Исмагиловой Айгуль Альфредовне на основании ч.1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».


СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан по избирательному округу №7 Зимину Сергею Владимировичу на основании ч.1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».


ЛДПР
18.19.20 СЕНТЯБРЯ
ВЫБОРЫ
ПРИХОДИ НА ВЫБОРЫ!
НЕ ДАЙ УКРАСТЬ СВОЙ ГОЛОС!
ГОЛОСУЙ ЗА КАНДИДАТОВ ОТ
ЛДПР


18 19 20
СЕНТЯБРЬ 2026


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ



18,19,20 СЕНТЯБРЯ ВЫБОРЫ!
ТОЛЬКО ЛДПР
+7 (347) 246-30-38, Г. УФА, УЛ. СОВЕТСКАЯ, Д.18


ЛДПР
18.19.20 СЕНТЯБРЯ
ВЫБОРЫ
ПРИХОДИ НА ВЫБОРЫ!
НЕ ДАЙ УКРАСТЬ СВОЙ ГОЛОС!
ГОЛОСУЙ ЗА КАНДИДАТОВ ОТ
ЛДПР


СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан по избирательному округу №18 Власовой Светлане Анатольевне на основании ч.1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».


ВЯЧЕСЛАВ ЯКИН
КАНДИДАТ В ДЕПУТАТЫ ПО ОДНОМАНДАТНОМУ ИЗБИРАТЕЛЬНОМУ ОКРУГУ №15
ЕДИНАЯ РОССИЯ
СИЛА В ЕДИНСТВЕ
РАЗВИТИЕ Опыт Ответственность Транспорт
Профессионализм СЕМЬЯ Черниковка в сердце
благоустройство УЮТНЫЕ ДВОРЫ Контроль
Новые пространства ОЗЕЛЕНЕНИЕ ДОСТУПНАЯ СРЕДА ДЕТИ
МОЛОДЕЖЬ результат ИНВЕСТИЦИИ


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ


ПАРТИЯ
НОВЫЕ ЛЮДИ
ШАЙХУТДИНОВА ЕКАТЕРИНА
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №16


ПАРТИЯ
НОВЫЕ ЛЮДИ
АБДУЛЛИН ТИМУР
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №3


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ


ПАРТИЯ
НОВЫЕ ЛЮДИ
ПОНЯВИН АЛЕКСАНДР
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №14


ПАРТИЯ
НОВЫЕ ЛЮДИ
КАСЬЯНОВ АНДРЕЙ
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №12

✓ *Камил кеше тәбиғәттең үҙе һымаҡ, тик уның йөрәге бар. Ғәмәлдең файҙалы икәнен күрһә - иң тәүге сиратҡа ғәҙеллекте ҡуя, кемгәлер янаған хәүефте тойһа - үҙенең ғүмерен фиҙа итә.*

КЕМ АЛЫҠ!

Быйылғы ярты йыллыҡҡа "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусылар араһынан "бәхетле билет" эләккәндәрҙең исемдәрен барлайыҡ. Иң тәүҙә сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат рәхмәтлебеҙ икәнде белдерәйек. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр.

ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!



Белорет ҡалаһынан Рәсимә Аҫылғужина, Асҡын районы Ҡарткиҫәк ауылынан Фәнүрә Нәбиуллина **- Яныбай Хамматов "Төньяҡ амурҙары";**

Баймаҡ районы Йомаш ауылынын Миңлебикә Янбаева, Учалы районы Мәскәү ауылынан Зәкиә Шәһәрғазина, Йылайыр районы Яманһаҙ ауылынан Гүзәл Моталлапова **- Рамазан Өмөтбаев "Көмөш даға";**

Әбйәлил районы Елембәт ауылынан Ф. Шәмсетдинова, Үргә Әбдрәш ауылынан Рәзилә Дилмөхәмәтова, Ҡырҙас ауылынан Изрис Ноғоманов, Учалы районы Мәскәү ауылынан Флүрә Садыкова, Баймаҡ районы Мәмбәт ауылынан Хәбир Юнысов **- Мәүлит Ямалетдин "Ишмөхәмәт сәсән";**

Учалы районы Мәскәү ауылынан Зөләйха Мөхтәрова, Иҫке Байрамғол ауылынан Марат Сәйфетдинов, Баймаҡ районы 1-се Этҡол ауылынан Булат Азаматов, Мәләүез районы Арыҫлан ауылынан Ғәйнетдин Камалетдинов **- Ғәлим Хисамов "Һайланма әҫәрҙәр";**

Көйөргәҙе районы Аҡһары ауылынан Гөлсөм Сәлихова, Баймаҡ районы Урғаҙа ауылынан Фәниә Әминева, Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Самат Хәйруллин **- Аҡмулла "Хикмәтле һүҙ";**

Белорет районы Сосновка ауылынан Земфира Каримова, Баймаҡ районы Үргe Яйыҡбай ауылынан Зөлхәбирә Мырҙағәлина, Ғафури районы Ерек ауылынан Гөлшат Дәүләтова - **Е.Е.Нечвалода "Орнамент счетной вышивки башкир";**

Учалы районы Мәскәү ауылынан Таңсулпан Ғөбәйҙуллина, Йылайыр районы Яманһаҙ ауылынан Ғәйшә Аҡҡужина, Сибай ҡалаһынан Хәлил Һөйөндөков **- Тамара Ғәниева "Тел асҡысы";**

Сибай ҡалаһынан Кәбирә Мусина, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Миләүшә Моратова, Юлдыбай ауылынан Әнисә Алсынова **- Шәйехзада Бабич "Халҡым өсөн";**

Баймаҡ районы 2-се Этҡол ауылынан Әкрәм Ҡайыпҡолов, Әбйәлил районы Рысҡужа ауылынан Зөһрә Мәһәҙиева, Йылайыр районы Йылайыр ауылынан Гәүһәр Байғолова **- Фирүзә Абдуллина "Әсәйем һабаҡтары";**

Хәйбулла районы Садовый ауылынан Вәлимә Шаматова, Күгәрсен районы Сәйетҡол ауылынан Миникамал Ғәйнуллина, Учалы районы Ҡобағош ауылынан Зөлфиә Ғаздалова **- "Башҡорт халыҡ әкиәттәре";**

Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Ә. Ҡускарова, Йылайыр районы Япарһаҙ ауылынан Рауил Вәхитов, Учалы районы Мәскәү ауылынан З. Мөхтәрова, Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Радик Солтанғолов, Көйөргәҙе районы Түбәнге Бабалар ауылынан Радик Хәлитов, Ейәнсура районы Бикбау ауылынан Ләлә Тулеганова **-"Башҡортса дини календарь";**

Өфө районы Фомичев ауылынан Сания Әминева, Йылайыр районы Байғужа ауылынан Шәмсекамал Мырҙагилдина, Үргe Ғәле ауылынан Сәкинә Асаинова, Белорет районы Сосновка ауылынан Фәнилә Мусина, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин, Ишембай районы Хажы ауылынан Нурзидә Дауытова **- Рәсүл Байгилдин "Һай, түрәккәйгенәһе";**

● Шулай итеп, был акциябыҙ киләһе 2027 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу барышында ла үҙ көсөндә икәнен белеп ҡуйығыҙ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ, тыуған көнөгөҙҙө лә хәбәр итһәгеҙ, гәзит биттәренән ҡотлап, һеҙҙе лә шатландырырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы (индекс, йәшәгән урам исеме, йорт номеры мотлаҡ кәрәк), аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

Иҫкәрмә. Бүләкләнеүселәр китаптарҙы үҙҙәренең почтальондары аша алыр.

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru

МӨХӘРРИРИӘТ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

9 сентябрь "Ай тотолған төндә" (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+

М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

4 сентябрь "Антоний. Клеопатра" (У. Шекспир,), трагедия. 19:00. 16+
5 сентябрь "Всё могло бы быть иначе..." (И. Губач, М.Күлбаев), лирик комедия. 18:00. 16+
8 сентябрь "Конёк-Горбунок" (П.Ершов, В.Хрущев), әкиәт. 11:00. 6+
10 сентябрь "Рассказы Альфии" (М. Кәрим, М.Күлбаев). 11:00. 6+

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

5 сентябрь "Кукольная кухня" (Н. Беззубова, А. Верхоземский), интерактив уйын-спектакль. 12:00. 0+
6 сентябрь "Три поросенка" (Д.Гараева).12:00 һәм 15:00. 0+

Сибай концерт-театр берекмәһе

10 сентябрь МС БАШ (Загит Кунафин) концерты. 6+

БР Милли музейы

5 сентябрь "Бальные танцы" лекция һәм оҫталыҡ дәресе. 18:00-20:00. 0+
8 сентябрь "Язык - ключ к культуре" Рәсәй халыҡтары теле көнөнә ҡарата музей акцияһы. 11:00 -16:00. 6+
10 сентябрь "Сила и честь. Искусство войны" автор экскурсияһы. 16:00-17:00. 6+

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәкиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ИКЕ ШОҢҠАР ТАЛАШҺА...

бер ҡарғаға ем булыр

Атың барҙа елеп ҡал, елә алмай торған көн дә килер.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Цзен Цзы тигән берәү Конфуцийҙың уҡыусылары менән осрашып, улар менән изгелек, йән камиллығы, эскерһеҙлек һәм ҡомһоҙлоҡ тураһында фекер ҡора һәм шулай ти:

- Мин ике хужаға хеҙмәт иттем. Тәүге хужамда мин хеҙмәтем өсөн бик аҙ ғына эш хаҡы алдым. Эш хаҡымдың өстән ике өлөшөн атай-әсәйемә ебәрҙем, бер өлөшөн генә үҙемдә ҡалдырҙым һәм ошо ғәмәлемдән һуң мин бөтөн донъя байлығына эйә кешеләй шатландым... Икенсе хужама хеҙмәт иткәндә ул миңә бик күп аҡса бирҙе, әммә мин ул аҡсанан атай-әсәйемә өлөш сығарманым һәм был минең йөрәкте шул тиклем әрнетте...

Уҡыусылары был һөйләшеү тураһында Конфуцийға һөйләп бирә һәм: "Уҡытыусыбыҙ, әйтегеҙ әле, Цзен Цзыны ҡомһоҙлоҡта ғәйепләп буламы?" - тип һорай. "Була, - ти Конфуций. - Бында ҡомһоҙлоҡҡа урын бар. Телмәрендә мәкер ҙә бар. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: Цзен Цзы ике хужала хеҙмәт иткән, уның тойғолары ике тапҡыр үҙгәреш кисергән. Ҡомһоҙлоҡтан арынған кеше булһа, ул аҡса мәсьәләһендә шатлыҡ йә ҡайғы кисерер инеме ни? Аҙ аҡса менән күп аҡсаны сағыштырыр инеме?.." "Тимәк, Цзен Цзы ҡомһоҙ булып сығамы?" - тип һорай тағы уҡыусылары. "Тегеләй ҙә, былай ҙа түгел, - ти Конфуций. - Цзен Цзы бары тик бик күптәр кеүек үк камил булмаған кеше. Үҙенең тәжрибәһенә генә таянһа, ул һеҙҙе бер нигә лә өйрәтә алмаясаҡ. Ысын ихласлыҡта кешелеклелек аҙ". "Улай булғас, нимә һуң ихласлыҡ?"- тип төпсөнә һаман уҡыусылары. "Камил булмаған кеше - ул үҙ теләктәре ауында буталған себен кеүек. Ундай кеше кемгәлер ниҙер бирә һәм рәхмәт һүҙе көтә. Рәхмәт һүҙен ишетмәһә лә, ул барыбер үҙе эшләгән изгелекте күңелендә, хәтерендә тота, үҙ-үҙенән ҡәнәғәт ҡалып, әҫәрләнә. Бындай әҫәрләнеү - ғорурлыҡ инде ул, ә камил кешелә ғорурлыҡ булмай. Ҡарағыҙ, ямғыр үҙенең һыуын кемгә һибергә тип һайлаймы? Ул үҙенең дымын сарсағанға ла, һыуланмаҫ өсөн ышыҡҡа йәшенгәнгә лә һайламай бирә. Ҡояшҡа ҡарағыҙ - ул кемде йылытырға икән, тип һайланамы ни? Изгелекте һәм игелекһеҙлекте һайлап алып буламы? Камил кеше тәбиғәттең үҙе һымаҡ, тик уның йөрәге бар. Ғәмәлдең файҙалы икәнен күрһә - иң тәүге сиратҡа ғәҙеллекте ҡуя, кемгәлер янаған хәүефте тойһа - үҙенең ғүмерен фиҙа итә. Ундайҙар биргән вәғәҙәләрен дә гел иҫтә тота, ә башҡалар биргән вәғәҙәне онота. Камил кеше изгелек һәм ихласлыҡ тураһында һөйләгәндә, Цзен Цзы кеүек, үҙен миҫал итеп килтермәйәсәк бер ваҡытта ла..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Башҡортостан Республикаһы буйынса Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығында теркәлде:
ПИ №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Ғәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.
Тел.: 8 (347) 226-99-48.
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 3.09.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 3.09.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 4.09.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2487
Заказ - 1558